✓ *Дуҫыңды еңелсә ярат! Көндәрҙән бер көндө уға асыуың килеп, дуҫлығығыҙ боҙолоп китеүе мөмкин. Дошманыңа еңелсә дошманлыҡта бул! Көндәрҙән бер көндө шул кеше дуҫың булып китеүе мөмкин.*

*ХӘҘИСТӘРҘӘН.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

1 - 7 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№48 (518)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Илһөйәрлек ҡайҙан башлана,
йәки Йәмһеҙҙе,тоҫһоҙҙо, емеректе көслəп яраттырып буламы?



3

Рухи ныҡлығыбыҙ...
һынау тота



6-7

Бар һорауҙарҙың да яуабын белһәгеҙ...



8-9 театр ишегенә йоҙаҡ элергә генә ҡала

Күрәҙәсегә ышанып...
башыңа бәлә алма



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө көндә митингыларға сығып, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеп була, тип уйлайһығыҙмы? Ошо маҡсатта гайд-парктар булдырыуға мөнәсәбәтегеҙ нисек?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** Белеүегеҙсә, РФ Дәүләт Думаһы тарафынан күмәк саралар үткәреүгә ҡағылышлы бер нисә закон ҡабул ителде. Шуға бәйле беҙ үҙ закондарыбыҙҙы федераль закондарға яраҡлаштырырға бурыслыбыҙ. Шундай закондарҙың береһе - "Асыҡ саралар үткәреү урындары тураһында"ғы закон проекты. Ул күп халыҡ ҡатнашлығында асыҡ саралар үткәреү урындары булдырыу өсөн дөйөм ҡағиҙәләр билдәләй. Унан, шуларға нигеҙләнеп, республика Хөкүмәте тарафынан аныҡ урындар тәғәйенләнә. Һәр бер тораҡ пунктында уның үҙ "гайд-паркы" булдырыласаҡ. Шулай итеп, йәмғиәт менән власть араһындағы диалог цивилизациялы юл менән хәл ителеүгә йүнәлтеләсәк. Һәр бер кешенең, шул иҫәптән митингыларға сығып та, үҙ фекерен белдерә алыуға хоҡуғы бар. Тик шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер мәсьәләләргә иғтибарҙы туплап, митингыларға йөрөмәйенсә, көндәлек эштәре менән мәшғүл булған башҡа граждандар тураһында ла оноторға ярамай. Шуға күрә лә законда инфраструктура объекттары, балаларҙың ялын үткәреү урындары, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары, дәүләт власы органдары һәм башҡаларға ҡағылышлы ҡайһы бер сикләүҙәр бар. Закон составына Дәүләт Думаһы депутаттары ғына түгел, ә төрлө министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре лә ингән эшсе төркөм тарафынан эшләнде. Хәҙер сират — йәмғәтселеккә. Аныҡ тәҡдимдәрегеҙҙе көтәбеҙ. Бер үк ваҡытта халыҡ митингылары өсөн ниндәйерәк урындар яйлы булыр ине — шул хаҡта ла фекер алышырға мөмкин.

***Марсель ҒӘЛИМЙӘНОВ, студент:*** Мәсьәләләрҙе урамға сығып ҡына хәл итеп булһа икән! Ә шулай ҙа нимәгәлер власть, йәмғәтселек иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында митингыға сығыуҙы берәү ҙә тыймай, тик бында закон боҙоуҙарға юл ҡуйырға ярамай. Ә боҙмаҫ өсөн закондарҙы яҡшы белергә кәрәк. Әле бына ошондай йыйын һәм пикеттар үткәреү өсөн урындар булдырыу мәсьәләһе буйынса БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе К.Толкачев блогында ҡыҙыҡлы фекер алышыуҙарға тап булдым. Англиялағыса, беҙҙә лә гайд-парк булдырмаҡсылар, аңлауымса. Берәүҙәр бының өсөн Өфө ҡала округы Советы алдындағы Ленин һәйкәле майҙанын, икенселәр Калинин паркын, йә булмаһа, Ҡунаҡһарай майҙансығын тәҡдим итә. Ә бер блогер (көлкө, әлбиттә), әйҙәгеҙ, бындай митингыларҙы урманда үткәрәйек, тип кәңәш бирә... Һәр хәлдә был мәсьәләне блогерҙар хәл итмәйәсәк, әлбиттә. Ул Хөкүмәт, власть ҡарамағындағы мәсьәлә. Минең фекер шундай: әгәр митинг һәм демонстрациялар ҡала халҡы тормошона, транспорт хәрәкәтенә ҡамасаулыҡ итмәй икән, уны ҡаланың үҙәк урындарында ла үткәрергә мөмкин. Юғиһә, ҡайҙалыр ҡала ситенә, аулаҡ урынға барып, фекереңде белдереүҙе кем һуң ишетер?

**(Дауамы 2-се биттә).**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠЛЫ

**Ейәнсура районының Үрге Бикбирҙе ауылында йәшәүсе ветеран Ҡасим Янбаев 1976 йылдан фенолог яҙмалары алып бара. Был яҙмаларҙа ул һауа торошо, уңдырышлылыҡ, ауыл тормошондағы ваҡиғаларҙы теркәй. Ҡасим ағай был мәғлүмәттәр менән өс ҡалын дәфтәрҙе тултырып, дүртенсеһен башлаған да инде. Һәүәҫкәр фенолог үҙенең күҙәтеүҙәренә нигеҙләнеп, быйыл беҙҙе ниндәй ҡыш көтә, яҙ ҡасан килә һәм киләһе йәйҙә тағы ла ҡоролоҡ янамаймы, тигән һәр кемде борсоған һорауҙарға үҙ фараздарын тәҡдим итә.**

# ФЕНОЛОГ ЯҘМАҺЫНАН...

## матур йыл фаразлайбыҙ



- Быйылғы ҡыштың башланыуына ҡарап, шуны әйтергә була: ул һуңғы йылдарҙағы ҡыштарға оҡшамаясаҡ, ләкин әүәлдән күҙәтелгән ғәҙәти ҡыш буласаҡ. Йәғни ҡар күп яуыр, бурандары ла булыр, температура артыҡ түбән төшмәҫ, тип уйлайым. Яҙмаларым буйынса, һуңғы тапҡыр ете йыл самаһы элек шундай ҡыш теркәлгәйне.

Беҙҙең яҡта ҡар быйыл 11 ноябрҙә үк яты. Бер нисә йыл рәттән бындай хәл күҙәтелгәне юҡ ине. Һуңғы йылдарҙа ноябрҙең икенсе яртыһында, йә ай аҙағында ғына яуҙы ҡар. Ә бит бер нисә тиҫтә йыл элек кенә ноябрь башындағы ҡар ғәҙәти күренеш ине. Әлеге мәлгә ҡар 30 сантиметр тирәһе яуған да инде. Сағыштырыу өсөн: үткән йылда ҡыш буйына шул тиклем генә ҡар яуғайны. Шул арҡала ул тиҙ иреп, шыҡырайып туңған ергә һеңмәйенсә, ағып бөттө. Яуым-төшөм ошондай тиҙлек менән барһа, быйыл ҡыш ҡар метр тирәһе тәрәнлектә булыр, тип ышанғы килә. Халыҡта шул тиклем ҡарҙы норма тип һанау ҡабул ителгән. Ләкин был "норма" һуңғы тиҫтә йылда күҙәтелмәй башлағайны.

Былтыр иң һыуыҡ көндәр декабрь аҙаҡтарына, ғинуар башына тура килде. Февралдә лә көндәр һыуыҡ булды. Тап ошо ай башында үткән ҡыштың иң түбән температураһы теркәлде. Быйылғы ҡыш сағыштырмаса йылыраҡ буласаҡ, тип фаразларға нигеҙ бар. Ғәҙәттә, тап йылы йылдарҙа ҡар күп яуа ла инде. Температураның 39 - 42 градусҡа тиклем төшөүе күҙәтелмәҫ, тип уйлайым.

Яҙ үткән йылдағыса иртә килмәҫ, моғайын. Былтыр 12 апрелдә һауа температураһы 24 градусҡа тиклем күтәрелгәйне. Ҡар ошо көндә тулыһынса иреп бөттө. Ә 20 апрелдә һауа температураһы плюс 31 градусҡа етте. Минең күҙәтеүҙәр алып барған осорҙа бындай осраҡ булғаны юҡ ине әле. Дөйөмләштереп әйткәндә, яҙ 20 көнгә иртә килде. Ҡар тиҙ иреп бөттө, ергә һеңеп өлгөрмәне. Йәй ҙә ҡоро булды. Быйыл ерҙең артыҡ туңмауын иҫтә тотоп, ҡарҙың күп яуасағын күҙаллағанда, ер дымға туйыныр, тип ышанғы килә.

Йәй торошо, ғәҙәттә, ҡышҡыға тап килә, шуға ла ҡыш яуым-төшөм күп булһа, киләһе йәйҙә ямғыр мул яуыр, ҡоролоҡ булмаҫ, Аллаһы бойорһа.

**Азамат АБУТАЛИПОВ**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Бөгөнгө көндә митингыларға сығып, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеп була, тип уйлайһығыҙмы? Ошо маҡсатта гайд-парктар булдырыуға мөнәсәбәтегеҙ нисек?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, матбуғат хеҙмәте ветераны:*** Күптән түгелге тарихыбыҙҙа ғына ла халыҡтарҙың йыйынға, митингыларға сығып, бик тә мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙәге, ваҡиғаларға тейешле йүнәлеш биреп ебәреүҙәге тәжрибәһе хәтерҙән юйылмаған әле. Ә инде кемдәрҙер был хаҡта оноткан икән, тимәк, хәтерҙәрен ташҡа үлсәйем. Әлбиттә, майҙандарға әленән-әле сығып, ваҡ-төйәк мәсьәләләр буйынса хоҡуҡ давайлап йөрөп булмай, бының өсөн билдәле бер киҫкен сәйәси, социаль шарттарҙың килеп тыуыуы зарур, тип уйлайым. Әгәр власть халыҡ фекерен һанға һуҡмай, йәмәғәтселек абруйын танымайынса, тота килеп ҡарар ҡыла икән, ул саҡта урамға сыҡмай ҙа булмайҙыр, күрәһең. Шул уҡ ваҡытта митинг, пикет, демонстрацияларҙы фәҡәт протест билдәһе тип тә ҡарарға ярамай, ул бит теләктәшлек белдереү сараһы ла. Һәм, ғөмүмән, теге йәки был мәсьәләгә власть һәм киң йәмәғәтселек фекерен белдерергә теләгән һәр кеше майҙанға сығыу хоҡуғына эйә: мәҫәлән, тәбиғәтте йә булмаһа йәнлектәрҙе яҡлаусылар, законһыҙ төҙөлөштәргә ҡаршы килеүсе шул биләмәлә йәшәүселәр, Рәсәй территорияһындағы хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашҡан ветерандар һәм башҡалар. Бындай протест, фекер, мөнәсәбәт белдереү сараһы һәр бер дәүләт органдары тарафынан хоҡуҡи көйләнергә тейеш. Һәм ул шулай ҙа. Нисек кенә үҫешкән, демократик ил булмаһын, уларҙың бөтәһендә лә был мәсьәлә "йүгәнләп" тотола һәм был дөрөҫ: ғәмәлдәге дәүләт ҡоролошона хәүеф янарға тейеш түгел, уныһын яҡшы беләбеҙ, һәр нәмәлә тәртип булырға тейеш. Ә шулай ҙа "Башҡортостан Республикаһында асыҡ саралар үткәреү урындары тураһында"ғы закон проектында йәмәғәтселек хәрәкәтен артыҡ "ауыҙлыҡлау" менән мауығыу бар кеүек. Был иһә йыйын, митинг һәм демонстрациялар өсөн махсус урындар (халыҡ күҙенән ышыҡкараҡ), ҡатнашыусылар һанын һәм "майҙан тулылығын сикләүсе" нормалар булдырыуға ҡағыла. Уйлап ҡараһаң, көлкө лә булып китә: пикетты ойоштороусы бер кеше иҫәбенә ҡатнашыусылар һаны йөҙҙән артырға тейеш түгел. Ярай быныһы. Артабан уҡыйбыҙ: "...пикет үткәреү өсөн махсус тәғәйенләнгән урындағы майҙан тулылығы нормаһы унда ҡатнашыусыларҙың бербереһенән 50 метр тәшкил иткән ара менән билдәләнә". Күҙ алдына килтерҙегеҙме инде? "Стационар урындар менән йыһазландырылмаған махсус тәғәйенләнгән бина эсендә майҙан тулылығын сикләү 1 кешегә 1 кв.метр тәшкил итә". Аңлашылды ла ул, тик барыбер белге килә: метрлыҡ үлсәгестәрен тотоп, аралар иҫәпләп йөрөүселәр һаны нисәү булырға тейеш икән?

Унан һуң, барып, фекеренде белдереп ҡайтыу өсөн махсус урын - гайд-парктар булдырыу тураһында ишеткәс, тулышҡан күңелен ҡайҙа бушатырға белмәйенсә, сараһыҙҙан ағас ҡыуышына башын тығып: "Хандың башында таҙы бар!"- тип ҡысҡырған әкиәт геройы иҫкә килеп төштө... Сит илдәрҙә гайд-парктар ҡала уртаһындағы йәшел утрауҙы хәтерләтә: сирәмлек, сәскәләр, таҙалыҡ; ҡарт-ҡоро эскәмйәләрҙә ял итә, балалар уйнай, ғашиҡтар серләшә... Ә беҙҙә бындай урынды ҡала ситендә йә булмаһа халыҡ күҙенән алыҫта тәғәйенләй ҡалһалар, белмәйем, ул нимәгә әйләнер икән? Моғайын, ул эскеселәрҙең яратҡан төйәгенә әүереләсәк. Минеңсә, бында "велосипед" уйлап сығарырға кәрәкмәй, булған парктарҙы һөҙөмтәле итеп файҙаланыуҙы ойоштороу ҙа етәлер.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы аҙағына яҡынлаша. Был миҙгел баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Ошондай баһалау майҙанында һынатмайыҡ, тибеҙ: баҫмабыҙҙы уҡып, яратып өлгөргәндәр үҙҙәре лә һуңламаһын почта бүлексәләренә, дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ, күрше-күләнде лә иҫкәртеп ҡуйығыҙ. Гәзитебеҙгә 15 декабргә тиклем яҙылып ҡуйһағыҙ, таман була. Унан һуң да яҙылырға мөмкин, ләкин почта хеҙмәткәрҙәре, ғәҙәттә, гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгелен 15-тәрендә тамамлауҙы хуп күреүсән.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә** яҙылырға була. Ноябрҙә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры",** 10 уҡыусыға - **"Башҡортса дини календарь",** 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ. Хәтерегеҙҙәме, бер уҡыусыбыҙ күптән түгел шулай тип тәҡдим иткәйне: "Ауылдағы туғандарыма "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым да, квитанцияны конвертҡа һалып, һәр береһенә хат яҙҙым:"Бына һеҙгә 360 һум 24 тингә ярты йылға "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым, һуғым һуйғас, миңә кило ярым ит йә берике биҙрә картуф бирерһегеҙ", - тинем". Уҡыусыбыҙҙың ошо тәжрибәһен дә ҡулланып ҡарағыҙ, ни тиһәң дә, баҙар иҡтисады, алыш-биреш заманында йәшәйбеҙ бит.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **240 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...



Өфө ҡалаһы Совет районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мөрәжәғәтнамәлә 2013 йылды республикала Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан итергә тәҡдим итте. "Халыҡ менән тура бәйләнеш булдырыу мөһим: активистар, битараф булмаған кешеләр тәбиғәтте һаҡлау ҡануниәтен боҙоусылар менән көрәштә төп ярҙамсы булып торорға тейеш, - тип билдәләне республика башлығы. - Шул уҡ ваҡытта бындай хоҡуҡ боҙоуҙа ғәйепләнеүселәргә мотлаҡ яза бирелергә тейеш". Шулай уҡ Рөстәм Хәмитов халыҡтың, айырыуса йәштәрҙең экологик мәҙәниәтен күтәреү кәрәклеге хаҡында әйтте.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Документта алдағы һәм алыҫ киләсәккә республиканың өҫтөнлөклө йүнәлештәре билдәләнде. Үткән йылда тәҡдим ителгән "Халыҡ өсөн эшләү" исемле Мөрәжәғәтнамәһендә Рөстәм Хәмитов төбәктең иҡтисади мөмкинлектәрен халыҡ мәнфәғәттәренә йүнәлтеү зарурлығын алдағы ваҡытҡа төп маҡсат итеп билдәләгәйне.

✓Президент Мөрәжәғәтнамәһендә республиканың иң ҡеүәтле егерме төбәк иҫәбенә инеүе хаҡында әйтелә. Иҡтисади үҫеш темпы буйынса республика өсөнсө йыл рәттән ил буйынса уртаса күрһәткестәрҙән юғарыраҡ һөҙөмтәләр күрһәтә. 2010-2011 йылдарҙа тулайым төбәк продукты 14,5 процентҡа артты, ә Рәсәй буйынса уртаса күрһәткес 8,6 процентҡа тиң. Өсөнсө йыл рәттән сәнәғәт етештереүе үҫеүен дауам итә, үҫеш темптары уртаса Рәсәй күрһәткестәренән ике тапҡырға юғарыраҡ. "Эксперт" агентлығы баһалауынса, Башҡортостан "минималь иҡтисади хәүефтәр" номинацияһында беренсе урын биләй һәм инвестициялар йәлеп итеү ҡеүәһе буйынса иң көслө ун төбәк иҫәбенә инә.

✓Сергей Нарышкин һәм Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡорт дәүләт университетында уҡыу йортоноң Хоҡуҡ институты студенттары һәм уҡытыусылары менән осрашты. Осрашыу һорау-яуап форматында үтте. Студенттарҙы һәм уҡытыусыларҙы Дәүләт Думаһында практика үтеү, юридик факультеттарҙы тамамлаған йәштәрҙе эшкә урынлаштырыу, студенттарға матди ярҙам күрһәтеү варианттарына, шулай уҡ мәғариф өлкәһендә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген үҫтереүгә бәйле һорауҙар ҡыҙыҡһындырҙы.

КӨН ҠАҘАҒЫ

**Элек тотош мир менән демонстрацияларға сығып, байраҡтар елберҙәтеп, транспаранттар күтәреп, Октябрь революцияһы көнөн билдәләй инек. Хәҙер "Халыҡтар берҙәмлеге" тигән өр-яңы байрам барлыҡҡа килде. Күптәр уны хөкүмәт тарафынан бирелгән сираттағы ял һымаҡ ҡабул итһә, бәғзеләр, әлләсе, уның килеп сығыуын бер Алла белә, тип, яурындарын ғына һелкетә. Йәшерен-батырын түгел, Хоҙайға ҡалып бара шул көнөбөҙ...**



# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ҠАЙҘАН БАШЛАНА,

## йәки Йәмһеҙҙе,төҫһөҙҙө, емеректе көсләп яраттырып буламы?

Һүҙемде ҡыҙыл календарҙан башлауымдың әтнәкәһе шунда: тантаналар ниндәйҙер иҫтәлекле дата айҡанлы билдәләп үтелә, мәгәр кешенең булмышына илһөйәрлек ойотҡоһо һала алмай. Мәжлес өҫтәле кәйеф-сафа ҡороу өсөн ойошторола. Бөйөк рус яҙыусыһы Достоевскийҙың һүҙҙәрен хәтергә төшөрәйек әле: "Кешелекте юғары маҡсаттарға йүнәлткән идея йәшәтә". Беҙ, оло быуын, коммунистик идеологияға мөкиббән ки-теп ышанып, алда беҙҙе яҡты киләсәк ҡаршыларына өмөтләндек. Хрущев коммунизм таңының тыуырын 80-се йылға билдәләп ҡуйғайны ҡуйыуын, тик ул таң, нишләптер, атманы ла ҡуйҙы. Сабыр көттөк, хөрриәт ҡояшы бөгөн ҡалҡмаһа, иртәгә күренер, тип ымһындыҡ. "Алға, коммунизмға!" лозунгыһы ла әлегеләй көлдөрмәне, мин йәшәгән районды гәзите лә "Коммунизм өсөн" тип атала торғайны.

Әҙәм балаһын өмөт йәшәтә, тигәндәй, йәшәүе барыбер күңеллерәк ине ул осорҙа, тормош та мәғәнәлерәк, ейгән ризыҡ та тәмлерәк, татлыраҡ ине. Өмөтөбөҙҙөң нигеҙендә юғары хыял ятты, һәммәһе шул хыялды тормошҡа ашырам тип хеҙмәт итте: тир түкте, иген икте, төҙөнө, асыштар яһаны, дауаланы, тәрбиәләне, ижад итте, космосҡа осто... Тотош мәктәп алдына сығып йырлап тороуым әле лә хәтерҙә: "Ит тә күп беҙҙә, һөт тә күп беҙҙә, иген мул үҫә беҙҙең ҡырҙарҙа. Ҡыуып етербеҙ, уҙып китербеҙ, Американы, яҡын көндәрҙә!" Ана шул ҙур хыялдар һыйҙырған бөйөк илебеҙ 90-сы йылдар башында ваҡ киҫәктәргә ватылды, сәсрәне. Бөгөнгө шарттарҙа ҡайҙа әйҙәргә халыҡты? "Алға, капитализмға!"йәиһә "Беҙҙе киләсәктә Оло баҙар көтә!" тип алдайыҡмы ватандаштарыбыҙҙы, әүрәтәйекме?

Әлеге мәлдә йәмғиәтебеҙҙә төҙөүсе, тыуҙырыусы, ижад итеүсе түгел, ҡулланыусы психологияһы хөкөм һөрә: булғанын ашайбыҙ, эсәбеҙ, тотонабыҙ, бер тауарҙы ҡырҡҡа тәкмәстереп һатабыҙ, тик етештермәйбеҙ. Ошо көндәрҙә Пенза, Ростов, Красноярск өлкәләрендә икмәктәргә хаҡтар ике-өс тапҡырға артып китеп, урындағы етәкселәр иген ҡайҙа булған, тип баш ваталар, ти. Орлоҡ сәсмәһәң, хәләл көс сарыф итеп башаҡты үҫтермәһәң, көҙ ашлыҡты икмәһәң, әпәкәй үҙенән-үҙе өҫтәлдә хасил булмай бит, шуны ла белмәйҙәрме икән ни замана түрәләре! Бына мин юлда күп йөрөйөм, ашъяулыҡтай ғына сәселгән майҙан күрһәм, ҡыуанып китәм, ә һуң күпме баҫыуҙар ташландыҡ хәлдә билсән мамығы осора!

Бер нәмә хаҡында яҙырға йыйындым да, икенсегә төштөм дә киттем. Ләкин уларҙы теҙеүем дә тикмәгә түгел, тыуған төйәккә һөйөү иң беренсе тәрән инаныуҙан башлана. Әҙәм балаһына әҙәмсә көн итеү өсөн иң беренсе етеш донъя, һәйбәт аҡса түләгән эш урыны, өҫтәлдә ризыҡ, шунан мәктәп, мәҙәниәт усағы, батҡаҡһыҙ юлы булған ҡасаба, ауыл булыуы шарт. Шул саҡта ғына уның тамағы ғына түгел, күңеле лә туҡ, бөтөн була. Һәр кем ҙур илде бәләкәй генә тыуған төйәге, йәшәгән ере аша күрә, ҡабул итә, йәшәйешкә лә үҙе көн иткән бейеклектән ҡарай. Ауылда әле эш тә, аш та юҡ. Осто саҡ осҡа ялғап йәшәгән кешенең йәненә илһөйәрлек рухы өрөргә маташыу - төптө мәғәнәһеҙлек. Фәҡәт үҙ тамағын ҡайғыртҡан фәҡир кеше юғары тойғолар шауҡымында йәшәй алмай, киләсәк тураһында фекер йөрөтмәй. Беҙҙең илдә, руссалап әйткәндә, "прожиточный минимум", "минимальная зарплата" тигән төшөнсәләр бар. Шул минимумдарға максимум итеп, йәғни оҙаҡ итеп йәшәп буламы икән?

Яңыраҡ Рәсәй Президенты Указы менән йәмәғәтселек проекттары буйынса Идаралыҡ булдырылды. Был Идаралыҡтың туранан-тура шөғөлө - Рәсәй халҡының күңеленә илһөйәрлек тойғоһо һалыу һәм үҫтереү икән. Бик тә изге маҡсат. Ил башлығының илһөйәрлек тойғоһоноң юҡҡа сыға барыуы менән борсолоуы ла аңлашыла. Тик ул 35 кешенән торған Идаралыҡ эштәрен нимәнән башлар икән?

Әүәле йәш быуын аңына илһөйәрлек тойғоһо мәктәп партаһы артында уҡ Александр Матросов, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, генерал Шайморатов, Мәғүбә Сыртланова һымаҡ батырҙар, Риза Яхин, Эльвира Гулина кеүек хеҙмәт алдынғылары миҫалында һеңдерелә торғайны. Бөгөн йәш быуынды нисегерәк тәрбиәләргә һуң, ҡайһы шәхестәргә тиңләшергә өндәргә? Хеҙмәт Геройы миҙалын яңынан булдырыу тураһында һүҙ бара. Кемгә бирербеҙ икән уны? Әле мин Николай Валуев менән Анатолий Чубайсты, йәнә Максим Галкинды күҙ уңында тотам, башҡа тәғәйен кандидатуралар ҙа юҡ. Хеҙмәт Геройы дәрәжәһен булдырырҙан алда иң тәүҙә ысын хеҙмәтте тергеҙәйек, ә хеҙмәткә ҡарата хөрмәт үҙенән-үҙе килер.

Яңыраҡ бөйөк Сталинград алышының башланыуына 70 йыл тулды. Ҡаланы оборonalау тарихына Павлов йорто инеп ҡалған. Дүрт ҡатлы был йортто дошманға бирмәйенсә, 9 милләттән торған 31 һалдат һаҡлаған. Бына ҡайҙа һынала ул халыҡтар дуҫлығы, бына ҡайҙан башлана ул ватансылыҡ тойғоһо! Сталинград алышын тотош донъя халҡы өмөтләнеп күҙәтә, сөнки унда икенсе донъя һуғышының яҙмышы хәл ителә. Волга янындағы еңеүҙән һуң Европа ҡалаларында Сталинград урамдары барлыҡҡа килә, улар бөгөнгө көндә лә бар. Ә беҙҙә? Үткәндәргә ҡара яғыу бөгөн иң күп ҡабатланған проблемаларҙың береһенә әүерелеп бара. Тарихыбыҙҙы ҡарғап ҡына киләсәгебеҙ яҡтырып китмәҫ бит. Ленинды ни тиклем генә онотторорға тырышһалар ҙа, ул ликбез эшен башлап, тотош илдең халҡын аң-белем алырға парта артына ултыртҡан. Сталинды енәйәтсе кимәленә төшөрһәләр ҙә, ул хәүеф янағанда илде ташлап ҡасмай, Ҡыҙыл майҙанда парад үткәреп, һуғышсыларҙы үлемесле яуға оҙатҡан. Шул уҡ Сталин юҡлыҡ заманда бер генә мәктәпте лә яптырмаған, милли телдә уҡытыуҙы оптималләштермәгән!

Ликбез, мәктәп тураһында башлағас, дауам итәм: илһөйәрлек тойғоһо (ғаиләлә, балалар баҡсаһында) мәктәптә тәрбиәләнә. Уҡыу йорттарының эсендәге бихисап хәл ителмәгән мәсьәләләрҙе, өҙмәҫ тә ҡуймаҫ реформаларҙы хисаплап тормай, шуны ғына әйтәм: бөгөн илебеҙҙә мәктәптәр ябыла, урта мәктәптәр - тулы булмағанға, тулы булмағаны башланғысҡа әүерелә, башланғысы иһә - ябыла. Һылтауы - йәнәһе лә, ауыл уҡытыусыларының һөнәри кимәле түбән, йәнәһе лә, ауыл балаһы оңҡотҡа әүерелә, шуның өсөн дә балаларҙы автобустарға тейәп, көн һайын йөрөтөп үҙәктәрҙә уҡытыу фарыз. Көнө юлда үткән бала уҡыу тураһында уйлаймы икән? Йәнә ул автобустар соҡор-саҡырҙарға күпмегә саҡлы сыҙар? Ҡала балаларын да конвейер системаһы менән уҡытырға тотондолар, йәғни класта мотлаҡ 25 уҡыусы булыуы шарт. Тик уҡытыусы ул 25-се уҡыусының белем кимәлен аҙна аҙағына тиклем тикшереп өлгөрә аламы икән?

Илһөйәрлек рухын йөрөтөр уҡытыусы, тәрбиәсе һөнәре бөгөн йәштәрҙе ылыҡтырмай, сөнки унда йүнле аҡса түләмәйҙәр. Бәғзеләр, унда эш хаҡы артты бит, тип ҡаршы төшөргә маташыр. Эш хаҡы артты, әммә хәҙер дәфтәр тикшереү, класс, кабинет етәксеһе булыу бушлай атҡарыла һәм һөҙөмтәлә эш хаҡы әүәлге кимәлдә ҡалды. Тағы шуныһы, бөгөнгө мәктәп уҡытыусыһының уртаса йәше 45-50 йәштәр самаһында. Тағы ла бер 4-5 йылдан, теге, икмәк ҡайҙа булған, тигән һымаҡ, уҡытыусы ҡайҙа булған, тип хайран ҡаласаҡбыҙ әле, бына күрерһегеҙ.

Ауылдарҙа йөрөгәндә шуға иғтибар итәм: әллә ҡайҙан мәсет балҡып күренә, ә күп осраҡта мәктәптәр ташландыҡ хәлдә. Замана эшҡыуарҙары ауылында мәсет төҙөп, уға туған-тыумасаһының исемен биреү менән мәшғүл. Иманға ҡайтыу ҡыуандыра, тик иман аң-белем аша килә лә баһа. Мәскәүҙә ултырған ҡайһы бер етәкселәр аң-белем таратыу тураһында ҡайғырталар микән? Юҡтыр. Бына бер миҫал. Яңыраҡ Дәүләт Думаһы депутаты Жириновскийҙың әйткәндәрен уҡып, хафаға ғына түгел, ҡурҡыуға төштөм. Бына нимә ти ул (әйтелгәндәрҙең мәғәнәһен шул килеш ҡалдырыу маҡсатында тәржемәһеҙ генә килтерәм): "Они (образованная молодежь) будут свергать власть каждые 10 лет. Надо сдерживать образование, если мы хотим стабильности... Если раскрутим образование, вы себя обречёте на уничтожение". Тимәк, беҙҙең киләсәгебеҙ - эскелек һәм ҡара наҙанлыҡ?

Әүәле Үҙәк телевидениела "Яңылыҡтар" тапшырыуы уңыш йыйыу, төҙөлөш, етештереү эштәрен һөйөнсөләүҙән башлана торғайны, хәҙер үлтереш-ҡырылыш, янғын, һыу баҫыу, урлыҡты күрһәтеп исем һаталар, йәнәһе лә, Рәсәй фәҡәт шул кире күренештәрҙән генә әүәләнгән.

Ҡабатлайым, илһөйәрлеккә нигеҙ иң әүәл ғаиләлә һалына, шунан балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында, ары көндәлек тормошта дауам итә. Бала, уҡыусы матур сифаттар, яҡшы кешеләр, ыңғай күренештәр миҫалында тәрбиәләнергә тейеш, шул саҡта ғына ул яҡындарын ҡәҙерләр, әргә-тирәһенә яратып бағыр, башҡаларға миһырбанлы булыр. Ватансылыҡ - бирелгәнлек нигеҙендә гүзәллек тыуҙырыусы тулайым аң ул. Йәмһеҙҙе, төҫһөҙҙө, емерек-ҡыйралышты көсләп яраттырып булмай.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәй Дәүләт Думаһы рәйесе Сергей Нарышкин БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай спикеры Константин Толкачев, уның урынбаҫары Рафаил Зиннуров, БР Дәүләт Йыйылышы комитеттары рәйестәре менән осрашты. Ул Башҡортостан парламентарийҙарының эшмәкәрлегенә юғары баһа бирҙе. " Әлеге ваҡытта Дәүләт Думаһы депутаттары БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тәҡдим иткән 16 закон проекты өҫтөндә эшләй, - тип билдәләп үтте ул. - Яңыраҡ ҡына беҙ Мәғариф тураһындағы закон проектына төҙәтмәләр индереү өҫтөндә эшләй башланыҡ. Ҡоролтай депутаттары был йәһәттән ҙур эш башҡарған, төҙәтмәләрҙең байтағы һеҙҙең тарафтан тәҡдим ителде".

✓ Был аҙнала XII "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк проблемалары" төбәк конференцияһы үтте. Сара билдәле телсе-диалектолог, филология фәндәре докторы Нәжибә Мәҡсүтованың тыуыуына 80 йыл тулыуға, төрки телдәр диалектологияһы буйынса IX төбәк конференцияһын үткәреүгә 30 йыл тулыуға һәм "Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге (Көнбайыш диалект)" баҫмаһының өсөнсө томын сығарыуға 25 йыл тулыуға арналды. Конференцияла ҡатнашыусылар төрки, славян, фин-уғыр, кавказ, монгол диалектологияһының көнүҙәк проблемаларын, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын өйрәнеү мөмкинлектәрен, диалект шарттарында туған һәм дәүләт телдәрен уҡытыу мәсьәләләрен тикшерҙе.

✓ Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Раил Әсәҙуллин республика баҫмалары мөхәррирҙәре менән осрашты. Һүҙ университет һәм киң мәғлүмәт сараларының дини белем биреү өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеүе хаҡында барҙы. Ректор билдәләүенсә, юғары уҡыу йорто нигеҙендә эшләп килгән Ислам мәғарифын үҫтереүгә булышлыҡ итеү ғилми-тикшеренеү үҙәге дини экстремизм һәм ислам ҡиммәттәрен дөрөҫ күрһәтмәү мәсьәләләрен хәл итеү буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Үҙәк ислам университеттары һәм мәҙрәсәләр өсөн мөғәллимдәр әҙерләй. Осрашыуҙа йәнә дин әһелдәренә, шулай уҡ мәктәптәрҙә ислам дине нигеҙҙәрен уҡытҡан педагогтарға белем биреү мәсьәләһе күтәрелде. Дини темаға яҙған журналистар әҙерләү мәсьәләһенә айырым иғтибар бүленде.

**"Башинформ"дан.**

*ИҠТИСАД ХӘЛДӘРЕ*

# ӘЛЕГӘ ОТМАНЫ ЛА...

## отолманы ла

**Рәсәйҙең ВТО-ға инеүенә бер-нисә ай үтте. Был аҙымдың тәүге һөҙөмтәләренә күҙ һалырға була. Экспертар фекеренсә, ВТО-ға инеү беҙҙең ил өсөн әлегә ҙур үҙгәрештәр килтермәне. Ғөмүмән, Бөтә донъя сауҙа ойошмаһы ағзаһы булып китеүҙән Рәсәй иҡтисады әлегә отманы ла, отолманы ла.**

Тикшереүҙәр уҙғарғанда аналитиктар, тәү сиратта, сит ил тауары ҡыҫымына тиҙ бирешә торған өлкәләргә - автотранспорт, машиналар төҙөү, аяҡ кейеме, туҡыма әйбер тегеү индустрияһына һәм аҙыҡ-түлек етештереүгә - иғтибар итте. Әлегә был өлкәләрҙә барыһы ла тыныс. Ә бына һөт аҙыҡтары импорты 23 процентҡа артҡан. Иҡтисадсылар быны сит илдән тауар индереүгә һалым хаҡтарының әҙәйеүе менән генә түгел, ә Рәсәйҙә һөт аҙыҡтары етештереүҙең кәмеүе менән дә аңлата. Рәсәйгә шулай уҡ көнбағыш майы, тәмәке продукцияһы индереү ҙә артҡан. Сит илдә етештерелгән һыуҙа йөҙөү өсөн тәғәйенләнгән әйберҙәр һәм суднолар һаны, пошлина хаҡы шул уҡ кимәлдә ҡалыуына ҡарамаҫтан, өс тапҡырға тиклем күтәрелһә, еңел автомобилдәр импорты 40 процентҡа кәмегән.

Ҡалған өлкәләрҙә бындай күрһәткес бик әҙгә артҡан, йәки алдағы йылдар рәтендә ҡалған. Ғөмүмән, импорт өлкәһендә күҙгә бәрелеп торған үҙгәрештәр юҡ, ти эксперттар. Быны улар Рәсәйҙең ВТО-ға инеү алдынан һалымдарҙы яйлап төшөрөүгә хоҡуғын һаҡлап ҡалыуҙа күрә. Сит илдән тауар индереүгә һалым ғына тәьҫир итмәй, һумдың курсы ла йоғонто яһай. "Үткән йылдың көҙө менән сағыштырғанда, долларға ҡарата һум үҙ позицияһын күпкә кәметте. Нәҡ ошо сәбәп импорттың кәмеүенә килтерҙе. Бында ВТО-ның роле ҙур түгел", - ти аналитик Илья Раченков. Ғөмүмән, ВТО-ға инеүҙән эксперт ҙур үҙгәрештәр көтмәй.

Рәсәйҙең ВТО-ға инеү сәбәбе - сит илдәрҙә Рәсәй тауарының күләмен арттырыу. Был йәһәттән үткән айҙар ниндәй һөҙөмтәләр килтерҙе һуң? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был йәһәттән Рәсәй ҙур уңышҡа өлгәшмәне. Бында белгестәр ике сәбәп күрә. Беренсенән, әлегә Рәсәй тауарҙары алдында сит илдәр үҙ ишектәрен асырға ашыҡмай. Икенсенән, Рәсәй тауарын сит илгә сығарыу өсөн төрлө сикләүҙәрҙең күп булыуы ҡамасаулай, ти улар. Шулай ҙа был өлкәлә яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, алдағы йылдарҙа төрлө илдәрҙә Рәсәй тауарына ҡаршы йөҙгә яҡын сикләү булһа, бөгөн был һан 73-кә кәмене. Артабан да сикләүҙәр һаны яйлап кәмер, тигән ышаныста эксперттар. Бының өсөн яҡшы эҙемтәләр ҙә бар, ти улар, сөнки ВТО-ға ингәндән алып Рәсәй башҡа илдәрҙән сикләүҙәрҙең ВТО ҡағиҙәләренә тура килеүен талап итергә хоҡуҡлы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, ниндәйҙер һығымта эшләү иртә икәнлеген берәү ҙә инҡар итмәй һәм алда Рәсәйҙе ҙур үҙгәрештәр көтөү мөмкинлеге хаҡында ла онотмай. Рәсәйҙең ВТО ағзаһы булып китеү эҙемтәләре бик оҙаҡҡа етәсәк. Шуға күрә фараздарҙың, һүҙҙәрҙең һәм бәхәстәрҙең оҙаҡ тынмаясағына күнегергә генә ҡала.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# БЕҘҘӘН БАШҠА...

## беҙҙең хаҡта бер нәмә лә...

**...һөйләмәгеҙ, уйламағыҙ, хатта беҙҙең хаҡта фекер йөрөтмәгеҙ, беҙҙең өсөн ҡарар ҡабул итмәгеҙ, тип дауам итке килә һөйләмде. Был - ябай һөйләм генә түгел, уның артында кеше яҙмыштары, ғаилә кисерештәре, замандаштар ҡаһарманлығы ята. 1981 йылда ойошторолған Халыҡ-ара инвалидтар ойошмаһы үҙенә тап шундай девизды һайлай.**

Баш ҡала оругы хакимиәтендә уҙғарылған матбуғат конференцияһында ла төп лейтмотив булып тап шундай фекер үткәрелде - физик мөмкинлектәре (хатта ҡайһы бер осраҡта психик тайпылыштары булған) сикләнгән категория һау-сәләмәт кешеләрҙән бер нисек тә айырылмай. Бары тик уларҙы аңлап, ниндәйҙер осраҡта терәк булып, ҡулбашыңды ҡуйып, ғәҙәти кешеләрҙе лә зарланырға мәжбүр иткән тормош диңгеҙенә инергә мөмкинлек кенә бирергә кәрәк. Был фекерҙе быйыл Лондонда үткән Параолимпия уйындары һөҙөмтәһе лә раҫлай - физик мөмкинлектәре сикләнгән спортсылар һау-сәләмәт спортсыларыбыҙға ҡарағанда күберәк миҙалдар алып ҡайтты, шул иҫәптән Башҡортостан өлөшөнә 17 миҙал тейҙе! Әлбиттә, физик мөмкинлеге сикләнгән һәр кем чемпион булып китә алмай, шулай ҙа бөгөн баш ҡалала инвалидтарға социаль ярҙам күрһәтеү буйынса тормошҡа ашырылған программалар уларҙы үҙ-үҙҙәренә ярҙам итә алырлыҡ кимәлгә еткереүҙе иғтибар үҙәгенә ҡуя.

Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡиева белдереүенсә, бөгөн баш ҡалала дөйөм алғанда 77 мең инвалид теркәлгән (сағыштырыу өсөн: Ер шарында йәшәүсе халыҡтарҙың 15 проценты, Рәсәй халҡының һәр унынсы кешеһе - инвалид). Шул иҫәптән, балалар - 3 мең. Өлкәндәр араһында меңдән ашыу инвалид коляскаларҙа ғына хәрәкәт итһә, балалар арһында ундайҙар 305. Шулай уҡ ҡалала 63 ғаиләлә ике йәки унан күберәк инвалид бала тәрбиәләнә. Өфөлә инвалид балаларҙы реабилитациялауҙың өс үҙәге (береһе - республика профилендә) эшләһә, был йәһәттән өлкәндәргә бер аҙ ҡатмарлыраҡ - ололар өсөн бер генә үҙәк тә юҡ. Әлбиттә, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡарамағындағы учреждениеларҙың бүлексәләре бар, әммә унда сират ҙур һәм унда эләгеү ҙә ҡатмарлы.

Әлеге ваҡытта федераль кимәлдә "Ҡаршылыҡһыҙ мөхит" программаһы, ошо нигеҙҙә республикала маҡсатлы программа тормошҡа ашырыла. Инвалид балалар өсөн дистанцион белем биреү системаһы ғәмәлдә. Шулай уҡ был категорияға ҡараусылар өсөн төрлө спорт төрҙәре буйынса секциялар эшләй. Баш ҡаланың халыҡты социаль яҡлау идаралығы аша алынған йүнәлтмәләр буйынса былтыр 140 әсә һәм бала шифаханаларҙа һаулығын нығытһа, быйыл да шунса кеше ял итәсәк. Әлегә инвалидтарға ике экскурсия ойошторолһа, ошо көндәрҙә тағы бер сәфәр буласаҡ. 3 декабрь - Халыҡ-ара инвалидтар көнөндә лә, Яңы йыл байрамында ла физик мөмкинлектәре сикләнгән, сәләмәтлектәрендә төрлө тайпылыштар булған балалар иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ - улар бүләктәр алып ҡыуанасаҡ. Шулай ҙа йылдың иң мөһим ваҡиғаһы тип быйыл инвалид бала тәрбиәләүсе 49 аҙ тәьмин ителгән ғаиләнең фатирлы булыуын билдәләргә кәрәктер.

Әйткәндәй, ҡабат Халыҡ-ара инвалидтар ойошмаһының девизына урап ҡайтҡанда, шуны ғына өҫтәп әйтергә мөмкин - физик мөмкинлектәре сикләнгән категория тип атаһаҡ та, улар беҙгә ҡарағанда мәрхәмәтлерәк, наҙлыраҡ, ҡайһы берҙә хатта аҡыллыраҡ һәм көслөрәк. Беҙ уфтанып, зарланып үткәргән көндәрҙең һәр береһен улар оло бәхет итеп ҡабул итә!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# СИФАТЛЫ БЕЛЕМ...



## Өфө балаларында

**Хәбәр итеүебеҙсә, тиҙҙән баш ҡала бюджеты, нигеҙҙә, маҡсатлы программалар буйынса әҙерләнәсәк. Ә бындай программалар һәр өлкә, һәр йүнәлеш буйынса бар һәм тормошҡа ашырыла. Шуларҙың береһе 2011-2015 йылдарҙы үҙ эсенә алған "Баш ҡала мәғарифы - 2015" мәғариф системаһын үҫтереү программаһы. Уның төп маҡсаты булып граждандарҙың бушлай белем алыуы һәм һәр кемгә белем алыу мөмкинлеген булдырыу буйынса дәүләт гарантияларын, ҡаланың мәғариф системаһының тотороҡло үҫешен, сифатын үҫтереүҙе тәьмин итеү тора.**

Бөгөн баш ҡаланың дөйөм белем биреү системаһында 97 меңдән ашыу бала белем ала. 10 милли инновацион белем биреү учреждениеһы, 21 гимназия, 20 лицей, айырым предметтарҙы тәрәнәйтеп өйрәнеү һәм башланғыс әҙерлекле 12 урта дөйөм белем биреү мәктәбе, юғары кимәлле программалар буйынса 43 мәктәп һ.б. эшләй. Былтырғы уҡыу йылында белем сифаты - 60,5 процент, ә өлгөрөш 99,9 процент тәшкил иткән.

Инвалид балаларҙы һәм мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың мәғариф ресурстарына мөмкин тиклем яҡынраҡ итеү маҡсатынан ҡалала дистанцион белем биреү проекты тормошҡа ашырыла. Ике мәктәп базаһында бындай балаларҙы уҡытыу өсөн шарттар тыуҙырылған. 2012 йылда был программаға 10 мәктәп индерелгән.

Һәләтле балалар һәм үҫмерҙәр менән эшләү күләме 96,4 процент тәшкил итә. Ҡаланың иң яҡшы 40 уҡыусыһы - Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының, 20 бала Башҡортостан Республикаһы Президентының стипендияһын ала. Бөгөнгә 200

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөгә эш визиты менән Рәсәй Дәүләт Думаһы рәйесе Сергей Нарышкин килде. Визит сиктәрендә Рәсәй парламенты спикеры депутаттар корпусы, юғары уҡыу йорто студенттары, республиканың йәмәғәт һәм дин эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙар үткәрҙе.

✓ Өфөлә, БР Халыҡ бейеүҙәре ансамбле йортонда, атаҡлы башҡорт балетмейстеры Фәйзи Ғәскәровтың бюсы ҡуйылды. Авторы - скульптор Владимир Дворников. Билдәле булыуынса, быйыл Фәйзи Ғәскәровтың тыуыуына 100 йыл тулыу билдәләнә. Был ваҡиғаға "Азия йөрәге" Рәсәй халыҡтарының хәҙерге заман сәнғәте фестивале арналды. Өфөлә илдең иң яҡшы бейеү коллективтары сығыш яһаны.

✓ ОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек сиктәрендә Өфөнөң урам-юл селтәрен яҡшыртыу өсөн ҙур средстволар талап ителә. Был маҡсаттарға Башҡортостандың Юл фондынан йыл һайын яҡынса 3 миллиард һум аҡса бүленәсәк. 2013 йылға йәйәүлеләр өсөн дүрт ер өҫтө үткәүелен төҙөй башлау планлаштырыла. Чесноковка ауылы эргәһендә лә юл үткәргесе төҙөләсәк. Шулай итеп, Өфө - Аэропорт трассаһында бер светофор ҙа булмаясаҡ һәм унда кешеләрҙең сығыуы тыйыласаҡ.

✓ Өфөнөң Конгресс-холында күренекле совет дипломаты Кәрим Хәкимовҡа арналған "Рәсәй һәм Ғәрәп донъяһы: тарих һәм бөгөнгөһө" исемле Хәкимов уҡыуҙары үтте. Ғилми форумда Рәсәй-Ғәрәп донъяһы мөнәсәбәттәренең тарихи тәжрибәһе һәм бөгөнгө торошо, тарихтың төрлө осорҙарында дәүләттәрҙең тышҡы сәйәси курсы үҙенсәлектәре һәм башҡа мәсьәләләр тикшерелде. Пленар ултырышта Мәскәү, Санкт-Петербург, Өфө ҡалаларының алдынғы шәрҡиәтселәре, ғәрәп теле һәм мәҙәниәте белгестәре сығыш яһаны.

✓ Башҡортостан йыл аҙағынаса "Торлаҡ" федераль маҡсатлы программаһын тормошҡа ашырыуға өҫтәмә средстволар аласаҡ 19 төбәк иҫәбенә инде. "Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" ярҙамсы программаһы сиктәрендә торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн йәш ғаиләләргә социаль түләүҙәрҙе ҡушма финанслауға Рәсәй Федерацияһы субъекттарына 2012 йылда федераль бюджеттан субсидиялар бүлеүгә үҙгәрештәр индереү тураһындағы ҡарар РФ Хөкүмәте ултырышында ҡабул ителде.

✓ *Айыҡ туй буласағы тураһында алдан иҫкәртелһәләр ҙә, берәү ҙә саҡырыуҙан баш тартмай. Киреһенсә, ҡыҙыҡһынып киләләр һәм хатта, былай яҡшыраҡ икән дәһә, тиешеп таралалар.*

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Бынан егерме биш йыл элек, 1987 йылда, Әбйәлилдең ике ауылында хәмерһеҙ туйҙар үтә: уларҙың береһе Һәйетҡол ауылы ҡыҙы Ғәфүрә менән Үтәгән егете Зәит Йәһүҙиндарҙыҡы, икенсеһе - Ишҡол ҡыҙы Гөлгөнә менән Әбйәлил ҡасабаһы егете Илдар Әбделғәзиндарҙыҡы була.**

# ӘБЙӘЛИЛДӘ...

## айыҡ туйҙар үтә



Ул ваҡытта, әлбиттә, бер-береһен белмәгән был ике йәш ғаилә 25 йылдан һуң бер айыҡ туйҙа осрашырбыҙ, тигән уйҙы башына ла индереп сығармағандыр. Әммә бына мөғжизә! Бер-береһен табып, яратып, сәстәрен-сәскә бәйләргә ҡарар иткән Әбделғазиндарҙың улдары Илгиз менән Йәһүҙиндарҙың ҡыҙы Әминә быйыл тағы ла бер хәмерһеҙ туйҙың сәбәпселәре булды. Тормош юлдарын айыҡ туй менән башлап ебәргән ата-әсәләрҙең балаларының да туйын хәмерһеҙ үткәререргә теләүе тәбиғи, әммә улар был инициативаның башлап үҙҙәренән түгел, ә нәҡ балаларынан сығыуына ҡыуаныстарын йәшермәне.

Әлбиттә, бындай иҫтәлекле ваҡиғаға район етәкселеге лә иғтибарһыҙ ҡалманы. Әбйәлил районы ЗАГС-ында никахтарын теркәгән йәштәрҙе район ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе Лениза Камил ҡыҙы Сәғәҙиева тәбрикләне һәм район хакимиәте башлығы Радик Сыңғыҙовтың ҡотлау адресын тапшырҙы. Йәштәргә фатихаһын бирер өсөн оломон тип тормай, ара алыҫ тип тормай, Һәйетҡол ауылынан сәсәниә Вәсилә Садиҡова ла килеп етте. Уны Әбйәлил районда эскелеккә ҡаршы көрәш башында торған кеше тип беләләр. Нәҡ уның тәҡдиме менән 25 йыл элек Һәйетҡол ауылы айыҡлыҡ зонаһы тип иғлан ителде, был башланғысты бүтән ауылдар ҙа күтәреп алды. Клуб мөдире булып эшләгән Вәсилә Зәйнулла ҡыҙының йәштәрҙе айыҡ туйҙар үткәрергә саҡырыуын тәүҙә Зәит Йәсәр улы һәм Ғәфүрә Мөждәбә ҡыҙы ҡабул итте. Ул ошо хаҡта һөйләне һәм йәштәрҙе лә ата-әсәһенә лайыҡлы булырға өндәне.

Был мәҡәләне уҡығас, араҡыһыҙ туйҙың ней ҡыҙығы тип әйтеүселәр ҙә табылыр, әлбиттә. Әммә айыҡ туй буласағы тураһында алдан иҫкәртелһәләр ҙә, берәү ҙә саҡырыуҙан баш тартмай. Киреһенсә, ҡыҙыҡһынып киләләр һәм хатта, былай яҡшыраҡ икән дәһә, тиешеп таралалар. Был тәңгәлдә айыҡ туйҙар үткәреү буйынса ҙур тәжрибә туплаған Зәйтүнә Нәсибуллинаның тырышлығын билдәләмәйенсә булмай. Ҡасандыр мәктәптә "Тормош һабаҡтары"нан белем биргән уҡытыусы-пенсионер хәҙер туйҙарҙа башҡорт йолаларына нигеҙләнгән конкурстар, милли уйындар ойоштора, боронғо туй йолалары элементтарын индереп ебәрә. Үҙе шағирә булғас, һүҙгә лә аптырап тормай, артислыҡ һәләте лә мул бирелгән.

Ғаиләләренең изге традицияһын дауам итеп, тормош юлын айыҡ туйҙан башлаған Әминә менән Илгиз дин юлынан атлаған ата-әсәләренең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, үҙҙәре ише тәүфиҡлы балалар үҫтереп, уларҙың да туйҙарын хәмерһеҙ үткәрер, ғөмүмән, ул ваҡытта бөтә кешеләр ҙә эскеһеҙ йәшәү рәүешен һайлар, тип ышанғы килә.

**Рәхимә МУСИНА,**
**Әбйәлил районы.**

һәләтле бала, "Һәләтле йәштәрҙе хуплау" программаһына ярашлы, 30 һәм 60 мең һумлыҡ аҡсалата дәртләндереү алды.

Ҡаланың барлыҡ мәктәптәре лә - мультимедиа проекторҙары, 65 проценты интерактив таҡталар менән тәьмин ителгән, 74 проценты даими яңыртылып тороусы сайтҡа эйә. Компьютер синыфтары уртаса 12 машина менән комплектланған, бер компьютерға 19 уҡыусы тура килә (2011 йылда 21 бала булған).

Әйткәндәй, бөгөн баш ҡала мәктәптәрендә уҡыусы балаларҙың 98 проценты - туҡланыу, 83 проценты йылы аш менән тәьмин ителгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 11 процентҡа күберәк.

Баш ҡаланың Киров районында "Мәктәп картаһы" ҡулланыла. Әле был системаны Октябрь районының 6 мәктәбе үҙендә индерергә әҙерләнә. Ул ата-әсәләргә картаға һалынған аҡсаның нисек ҡулланылыуын интернет аша күҙәтеп барыу мөмкинлеген бирә. Бала туҡланыу өсөн ҡулаҡса ҡулланмай, ә карта менән иҫәпләшә, тимәк, аҡса файҙаһыҙ, ялтырауыҡ ҡағыҙҙарға төрөлгән продукцияға исраф ителмәй. Уҡытыусылар иһә туҡланыу өсөн аҡса йыйыуҙан, табель тултырыуҙан, отчет биреүҙән азат. Бындай "Мәктәп картаһы" программаһы әлегә Өфөнән башҡа бер ҡайҙа ла ҡулланылмай. Уны Санкт-Петербургта эшләгәндәр (һәм ҡаланың ни бары ике районында ғына ҡулланыла), һынауҙы Башҡортостандың баш ҡалаһы уңышлы үткәргән. Хәҙер инде Рәсәй төбәктәре Өфөгә тәжрибә алырға килә.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ



# МУТЛЫҠ...

## муллыҡҡа килтермәй

**Яңыраҡ Рәсәй Иҫәп палатаһы етәксеһе Сергей Степашин дәүләт бюджетынан йыл һайын бер триллион һум аҡса урлана, тип әйтте. Илдә мәктәптәр, дауаханалар өсөн аҡса таба алмайбыҙ, тиҙәр, ә кемдер, бер прокурор әйтмешләй, "урлаған аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй".**

● Пермь крайы хөкүмәте етәксеһе Роман Пановтың ҡулға алыныуы ла һиҫкәнергә мәжбүр итте. Был вазифаһында ике аҙна ла эшләп өлгөрмәгән етәксе, РФ төбәктәр үҫеше министры урынбаҫары булып эшләгән осоронда АТЭС саммитына бүленгән аҡсаны үҙләштереүҙә ғәйепләнә. Унда 16 млрд. һум урланғаны билдәле. Планлаштырылған 67 объекттың тик 23-ө генә рәсми тапшырылған. Ҡабул ителгәндәренең дә сифаты түбән булып сыҡты. Сочиҙа үтәсәк Олимпиада, футбол буйынса донъя чемпионатына бүленгән аҡсалар ҙа даими рәүештә коррупционерҙарҙы байытып тора, тигән хәбәрҙәрҙе әленән-әле ишетеп торабыҙ.

● Башҡа хәбәрҙәр. Аналитиктар нефткә хаҡтарҙың төшөүен күҙаллай. Бының Рәсәй бюджетына булған кире йоғонтоһо һиҙелерлек буласағына шик юҡ. 2001-2010 йылдар эсендә нефть һәм газ һатыуҙан Рәсәй 1,6 трлн. доллар табыш алған. Был унан алдағы тиҫтә йылдан алынған табыштарҙан биш тапҡырға күберәк. Тик ошо тиклем аҡсаны Рәсәй иҡтисады йүнләп үҙләштерә алманы. Вәғәҙә ителгән модернизация, инновация тигән проблемалар һаман да хәл ителмәй килә. Коррупция хөкөм һөргән дәүләттә бүтән һөҙөмтәләр көтөүе сәйер булыр ине.

● Дәүләт Думаһы министрҙарҙың һәм төбәк етәкселәренең эш хаҡы тураһында закон ҡабул итәсәк. Был закон буйынса яңы йылдан юғары дәрәжәле чиновниктарҙың эш хаҡы күпкә артасаҡ. Эксперттар фекеренсә, был сара уларҙың былай ҙа яҡшы матди хәлен аҡлар өсөн генә ҡабул ителә. Сөнки Дмитрий Медведев президент булған саҡта, чиновниктар коррупцияға бирелмәһен, тигән һылтау менән уларҙың эш хаҡын һиҙелерлек арттырғайны инде. Әммә коррупция кәмергә уйламаны ла...

● Балалар баҡсаһына йөрөтөү өсөн бөтә сығымдарҙы ата-әсәләр елкәһенә һалырға тигән закон проекты ҡарала. Был осраҡта ата-әсәләр туҡланыу өсөн дә, уйынсыҡтар, карауаттар һ.б. һатып алыу өсөн дә түләргә тейеш була һәм ул түләүҙәр айына 5-15 мең һумға барып етеүе ихтимал. Депутаттарҙың төп дәлиле лә ябай: ата-әсәләр былай ҙа түләй... Ә бит Росстат мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн күп балалы ғаиләләрҙең өстән бер өлөшөнөң балалар баҡсаһы өсөн түләргә хәленән килмәй.

● Бөйөк Британияла киләһе йылда Шотландия суверенитет тураһында референдум үткәрәсәк. АҠШ-та Ромни өсөн тауыш биргән штаттар, Испанияла - Каталония, Германияла Бавария үҙаллылыҡ тураһында һүҙ ҡуҙғата башланы. Шунда уҡ Дағстандан Дибиров тигән ректор милли республикаларҙың атамаһын үҙгәртеү тураһында тәҡдим менән сыҡты. Федераль үҙәктең был алымына иғтибар итергә кәрәкмәйҙер. Белеүебеҙсә, был алым милли республикаларҙы тағы ла бер тапҡыр теҙләндереү маҡсатында йыш ҡулланыла. Ә бит Мәскәү алып барған сәйәсәтте һәр төрлө һайлауҙарҙа башлыса милли республикалар ғына яҡлап килә. Быны Федераль үҙәк бик яҡшы аңлай һәм был аҙымды ҡурҡытып алыу сараһы тип кенә ҡуллана. Эт өрөп торасаҡ, әммә был аҙымға Мәскәүҙең ғүмерҙә лә бармаясағы көн кеүек асыҡ бит.

**Бәхтийәр ӘХӘТОВ.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ПРОСТАТА БИҘЕ АДЕНОМАҺЫ

❖ Ҡабаҡ өлгөргән ваҡытта һут һығып эсергә була. Көн һайын 2-3 тапҡыр ашарҙан алда бер ҡалаҡ бал буталған бер стакан һут эсергә.

❖ Был сирҙән сөгөлдөр һуты ла ярҙам итә. Яңы һығылған һутты эсерҙән алда һыуытҡыста ике сәғәт тотоп алығыҙ, был ваҡыт эсендә унан күңелде болғандыра торған ауыр үҙләштерелеүсе матдәләр сығып бөтә. Сөгөлдөр һутына бер ҡалаҡ бал өҫтәп, ашар алдынан көнөнә 2-3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Ысулдың файҙаһын тикшереп ҡарау өсөн бер-ике аҙна ҡабаҡ һуты эсеп ҡарағыҙ һәи ике аҙна ял итеп алғас, сөгөлдөр һутына күсегеҙ.

❖ Дегәнәк тамыры төнәтмәһе. 1 ҡалаҡ ваҡланған дегәнәк тамырын ярты литр һыуға һалып, талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Һыуытырға, һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә ҡабул итергә. Шул уҡ ваҡытта иң яҡшы дарыу - үҙ иммунитетың икәнен дә онотorға ярамай. Иммунитетты күтәреү өсөн балға бутап сәскә һеркәһе (1:1) ашарға кәрәк. Быны ашарҙан бер сәғәт алда, 1-әр балғалаҡлап ҡабул итергә.

❖ Татлы тамыр, ҡурйын үләне (солодка голая (лакрица). 1 ҡалаҡ ваҡланған тамырға ярты литр һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә, ашар алдынан стакандың өстән йәки дүрттән бер өлөшө күләмендә 4 тапҡыр эсергә.

❖ Күк сәскә (василек) һәм татлы тамырҙы 1-әр өлөш, талҡан емеште (толокнянка) 3 өлөш алып болғатырға. 10 грамм үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Үләндәрен алғандан һуң төнәтмә бер аҙ кәмей, уны алдағы күләменә тиклем еткерер өсөн һыу өҫтәргә. Ашар алдынан 15-20 минут алда 2-3 ҡалаҡлап эсергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр.

❖ Кәкүк баш (медуница лекарственная). 10 грамм киптерелгән үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ Аҡ омела үләне, дегәнәк тамыры, емешлеге менән кукуруз сәкәне (кукурузные столбики с рыльцами), ҡаҙ тәпәйе үләне (трава лапчатки гусиной), бәпкә үләне (трава горца перечного) - 15 грамм. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә. Көнөнә 2-3 стакан эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

> ✓ *Башҡорт милләтенән булмаған кешегә бер ҡайҙа ла башҡорт телендә идеаль һөйләшергә тигән талап ҡуйылмай. Ләкин ерле халыҡтың телен аҙ ғына булһа ла аңлау бер кемгә лә ҡамасауламай, ә, киреһенсә, ярҙам ғына итә.*



*УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА*



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Ун икенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Аллаға табыныу. Доға ҡылыуҙың күркәм тәртибе бар. Кеше намаҙға эске яҡтан да, тышҡы яҡтан да әҙерләнергә тейеш. Тышҡы әҙерлек - ул намаҙ урынын тәртиптә тотоу, тәһәрәт алыу, таҙа кейем кейеү. Тәһәрәт алыу тәртибе бар. Ул хаҡта айырым китаптар ҙа нәшер ителә. Ошондай әҙерлек барған саҡта, кеше үҙен эске яҡтан да әҙерләй, көйләй. Әлбиттә, көнөнә биш тапҡыр тәһәрәт алыу, намаҙ уҡыу тәртибе, эске көйләнеш, үҙ гонаһтарынды йәки ҡыйыҡ эштәреңде иҫкә төшөрөп, уларҙан арынырға тырышыу, йәғни Алланың ярлыҡауын үтенеү - сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһай. Һин берәйһе алдында ғәйепле икәнһең - туранан-тура үҙең әйтә алмаһаң, берәй яҡының аша ғәфү үтен. Эш боҙғанһың икән - төҙәтеү сараһын күр. Алдағанһың икән - дөрөҫөн һөйләү яйын тап. Улай ҙа эшләмәһәң, үҙ намыҫың алдында таҙарын.

Хәҙис шәрифтән:
Мин бит һөйәм барсағыҙҙы,
Мине һөйһәң, кешем,ҡолом,
Мин булырмын һаҡ ҡолағың,
Күрер күҙең, һуҙыр ҡулың,
Булырмын йөрөр аяғың,
Саф күңелең, ғәзиз телең.

## Ун икенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Уҡыусыларҙың үҙҙәренән ниндәй изге ҡоролмалар белеүҙәрен һорарға кәрәк. Мәҫәлән, беҙҙең ауылдағы мәсет күрше ауыл мәсетенән ни менән айырыла? Ә ни яғы менән оҡшаған, ниндәй уртаҡлыҡтары бар? Ауылда мәсет булһа, уҡыусылар менән бергә барып күрергә, ундағы тәртип менән танышырға, изге китаптарҙы, биналағы яҙыуҙарҙы ҡарарға мөмкин. Мәсеттәге дин әһеле - бөтөн мәсеттәр өсөн дә уртаҡ шартты - мәсеттәге михрабтың ҡибла яғына ҡаратып төҙөлөүен аңлатһын. Әммә дәреслектә бирелгән тиклем теманан ситләшеп, уҡыусыларҙы дингә өндәүҙән һаҡ булһын. Мәсеттә дин әһеленә һүҙ бирелә икән, уның маҡсаты фәҡәт дини йолаларҙы, мәсеттәге изге әйберҙәрҙең тәғәйенләнешен, мәсеткә инеү тәртибен аңлатыуҙан ғына ғибәрәт булырға тейеш. Ошондай уҡ сәйәхәтте, мөмкинлеккә ҡарап, башҡа изге ҡоролмаларға ла яһарға мөмкин. Төрлө дин тотоусыларҙың махсус ҡоролмалары тураһында дәфтәргә яҙып ҡуйырға кәрәк. Уҡыусыларҙың артабанғы тормошонда был мәғлүмәттәрҙең кәрәк булыуы ихтимал. Мәғлүмәтле булыу бер ваҡытта ла ҡамасауламай.

## Ун икенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Донъяла төрлө төшөнсәләр бар. Ә нимә ул ғәҙеллек? Ниндәй осраҡта ҡыҙыу бәхәс, талаш, асыуланышыу, бер-береңде яратмай башлау, үс алырға тырышыу һәм башҡа ошондай кире күренештәр килеп сыға? Ғәҙелһеҙлектән түгелме? Ни өсөн ғәҙеллек тураһында һөйләгәндә, һәр саҡ яҡшылыҡ тигән төшөнсә йәнәш тора? Уҡыусылар ошо һорауға үҙҙәре яуап бирһә, әлбиттә, бик яҡшы булыр. Ғәҙеллек юғалған ерҙә яманлыҡ башлана. Ғәҙел булыу - яҡшылыҡтың төп шарттарының береһе. Тимәк, һин яҡшы кеше булып йәшәргә ынтылаһың икән, иң тәүге шарттарҙың береһе - ғәҙеллек. Уҡыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренән сығып, ҡайһы бер төшөнсәләрҙе асыҡлап китеү яҡшы булыр.

Мәҡәлдәр. Көн яманы китер, әҙәм яманы китмәҫ. Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр. Хәҡиҡәтте белмәү ғәйеп түгел, белеп тә күрмәү ғәйеп. Яҡшылыҡ итеү яҡшылыҡ күреүҙән яҡшыраҡ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ЙӘН ОРАНЫ*

# РУХИ НЫҠЛЫҒЫБЫҘ...

## һынау тота

### Ер кендеге - Торатау



Минең олатайым Ырымбур мәҙрәсәләрендә байтаҡ йылдар белем алған, фарсы, ғәрәп телдәрен яҡшы белгән бик ғилемле кеше ине. Заманында бил бирмәҫ көрәшсе булып, Шәйәхмәт батыр тигән исеме лә бар ине олатайымдың. Ул ғүмере буйы күп итеп умарта тотҡан, мин белгәндә лә йөҙләп баш умартаһы бар ине.

Беҙ бер өйҙә бер нисә ғаилә йәшәнек һәм ҡышҡы оҙон кистәрҙә олатайым, ейән-ейәнсәрҙәрен янына йыйып алыр ине лә, һандығынан ғәрәп, фарсы телендә яҙылған китаптарҙы алып, унан беҙгә бик ҡыҙыҡлы яҙмаларҙы уҡый торғайны (Ул китаптарҙы һандығына һалып, үҙе ҡушҡанса, ҡәберенә, баш осона ҡуйып күмделәр). 1958 йылдың йәйге бер аяҙ көнөндә олатайым беҙҙе йыйып алып, Ҡыҙҙар тауына алып менде (туғыҙынсы тиҫтәһен йомғаҡлап килгән бабай бер ярҙамһыҙ, таяғына "атланып" ҡына, үҙе үрмәләгәйне текә тауға). Менеп етеп, бер аҙ тын алғас, таяғын төньяҡ-көнсығышҡа һуҙҙы ла, беҙҙән: "Шунда, бик алыҫта-а, бер түбә күрәһегеҙме?" - тип һораны. Ыңғай яуап ишеткәс: "Ул башҡорт халҡы өсөн изгеләрҙән-изге булған Торатауҙың түбәһе. Яҡындан күрһәгеҙ, уның бейеклегенә, мәшһүрлегенә иҫегеҙ китер. Бына тыңлағыҙ, шул тау тураһында ниҙәр әйтелгән", - тип, кеҫәһенән иҫкесә яҙылған китап сығарып, уҡып алып китте. Унда яҙылғандарҙың күбеһе хәтерҙән сығып бөткән инде. Шулай ҙа Торатауҙың ер кендеге булыуы, уны тайпылдырмай күсәрендә тотоп тороуы, кешелек донъяһы ошо тау янында башланғыс алғаны хаҡындағылар иҫтә ҡалған. Шулай уҡ Нух бәйғәмбәр, кәмә, ахыры заман кеүек һүҙҙәр ҙә бар һымаҡ ине. Ер кендеге, тигәс, арбаның алды менән артын тоташтырыусы кендекте күҙаллап, ер шарын шул арба менән сағыштырып, башҡаһын бик иғтибар менән тыңламағанмындыр, буғай. Әммә олатайымдың иң аҙаҡтан: "Бик оло афәт тыуҙырмаҫ өсөн Торатауҙы күҙ ҡараһылай һаҡларға кәрәк. Былай ҙа тәне яралы уның. Торатау мәңге торорға тейеш", - тигәнен асыҡ хәтерләйем. Ағайым: "Ә һин уны яҡындан күрҙеңме?" - тип һорағас, олатайым: "Стәрлелә бер олуғ әҙәм үткәргән йыйындан ҡайтҡанда, урау булһа ла янына барып, әүлиәләр рухына бағышлап намаҙ уҡып киттем. Һуңыраҡ, Стәрле төрмәһендә ятҡанда, ике йылдан артыҡ көн дә тәҙрәнән уны сәләмләп, уға ҡарап доға уҡыным", - тип яуап бирҙе. Аҙаҡ: "Ауыр саҡтарымда изге тау миңә көс бирҙе, золом ҡоллоғонан иҫән-һау ҡотолорға ярҙам итте", - тип, ҡулын ҡашы өҫтөнә ҡуйып, бик оҙаҡ Торатау тарафтарына ҡарап торғайны. Әллә беҙҙең күҙгә саҡ-саҡ күренгән тау түбәһен шәйләп алдымы икән, әллә һуңғы тапҡыр бағыуы икәнен һиҙендеме икән. Әйткәндәй, уның "бер олуғ әҙәм" тигәненең Зәки Вәлиди икәнен һәм бер-береһе менән яҡшы таныш булыуын байтаҡ йылдар үткәс өләсәйемдең: "Әхмәтзәки ти-

*ТУҒАН ТЕЛЕМ...*

# АҢРА БУЛМАҺАҢ...

## асылыңа күҙ һал!

**Һуңғы ваҡытта мәктәптәрҙә милли телдәрҙе уҡытыуҙы сикләү тураһындағы хәбәр хатта Мәскәү тарафтарынан да ишетелә башланы. Ләкин быны ҡайһы бер уңышһыҙ сәйәсмәндәрҙең буласаҡ һайлауҙарға әҙерләнеү, мәрәй йыйыу өсөн әйтелгән буш һүҙе тип кенә ҡабул итәйек. Ә шулай ҙа... Хәүефләнергә лә урын-сәбәп бар. Юҡ, милли телдәр тураһында шундай һаҡһыҙ реплика ташлаған сәйәсмән йә уны хуплаған өсәү-дүртәү түгел, ә арабыҙҙағы үҙ туған теленә битараф булған ата-әсәләр ошо хәүефте көсәйтә. Барыһы ла, туған телеңде уҡыу-уҡымау ҙа хәҙер ата-әсә ихтыяры менән атҡарыла бит. Ә беҙҙең милләттәштәр араһында balaһын туған телендә уҡытыуға ҡаршылар етерлек. Ә бит сит милләт вәкилдәре араһында ла башҡорт телебеҙҙе теләп өйрәнгәндәр шулай уҡ етерлек. Улар аңлыраҡ булып сығамы улайһа?**

Бөгөн ошондай ғаиләләрҙең береһе хаҡында бәйән итмәксемен. Улар менән танышыуым ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡты. Красин урамындағы баҙарға китеп барышлай, "Хәләл" кафеһы янында бәләкәй генә үзбәк ҡыҙының "әсәй" тип өндәшеүен ишетеп ҡалдым һәм туҡтамайынса булдыра алманым, сөнки үзбәк телендә был һүҙ бөтөнләй икенсе төрлө яңғырай икәнен беләинем. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмайынса, улар менән әңгәмә ҡорҙом.

Улар тигәнем - Үзбәкстандан Башҡортостанға биш йыл элек килеүсе Диләрә һәм Илхом Исаковтар ғаиләһе. Биш йыл Мәскәү ҡалаһында йәшәгәндән һуң, улар беҙҙең республикаға килеп төпләнгән һәм әлеге ваҡытта үҙ эштәрен асып, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Ғаиләлә ике бала - Әүбәкер исемле малай һәм Сарбина-Баныу исемле ҡыҙ үҫә. Улар Өфөнөң 10-сы мәктәбендә белем ала. Ата-әсәһе әйтеүенсә, улар мәктәпкә бик теләп йөрөй һәм тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшә. Икеһененең дә яратҡан дәрестәре араһында башҡорт теле бар. Айырыуса Сарбина-Баныу оло тырышлыҡ менән телде өйрәнә икән. Кафе ҡаршыһында ваҡ-төйәк әйбер һатып тороусы башҡорт ағай-апайҙарҙан да "уҡытыусы" эшләп алған ул. Белмәгән йәки аңлап етмәгән һәр һүҙен уларҙан һорай, һүҙҙең, һөйләмдең тәржемәһен генә яҙып алмай, ә мәғәнәһенә төшөндөрөүҙе лә талап итә. Әсәһе Диләрә белдереүенсә, мәктәптә башҡорт теле өйрәнә башлағандан алып, ул "әсәй", "атай" тип өндәшә. Әүбәкер ҙә һеңлеһенән ҡалышмай, телде өйрәнеүгә күп ваҡытын бүлә. Мәктәптә башҡорт дуҫтарының күп булыуын оло ҡыуаныс менән һөйләй. "Улар миңә башҡорт телен өйрәнергә ярҙам итә һәм ҡайһы берәүҙәр кеүек, килмешәк, тип үсекләмәй", ти ул. Балаларының башҡорт телен өйрәнеүен Илхом һәм Диләрә лә хуплай.

- Беҙҙе һыйындырған, ҡулыбыҙға - эш, тамағыбыҙға - аш, йәшәр урын биргән Башҡортостанда башҡорт телен өйрәнмәү хаҡында хатта уйлап та ҡарағаныбыҙ булманы. Балалар ыңғайына беҙ ҙә башҡорт телен өйрәнәбеҙ, ни тиһәң дә мосолман ҡәрҙәштәрбеҙ һәм телебеҙҙә лә ниндәйҙер оҡшашлыҡтар бар. Башҡорт милләтенән булмаған кешегә бер ҡайҙа ла башҡорт телендә идеаль һөйләшергә, аралашырға, тигән талап ҡуйылмай. Ләкин ерле халыҡтың телен аҙ ғына булһа ла аңлау бер кемгә лә ҡамасауламай, ә, киреһенсә, ярҙам ғына итә. Беҙҙең кафеға инеүсе башҡорттарға үҙ телдәрендә бер-ике һүҙ әйтеп ебәрһәң, ҡыуаныстан күҙҙәре ялтырап, һине үҙ туғанылай күреп, уңыштар теләп сығып китә. "Һаумыһығыҙ" йәки "Һау булығыҙ" тип әйткәндән тел өҙөлөп төшмәй, ә улар икенсе юлы беҙҙең кафе эргәһенән үткәндә мотлаҡ тағы ла инәсәк. Уларға ла һәйбәт, беҙгә лә яҡшы, - ти улар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай һөйләшеү килеп сыҡты. Ләкин күңелгә һеңеп ҡалған һүҙҙәрҙе Илхом әңгәмә аҙағында әйтте: "Телдәрҙең дә, кешеләр кеүек үк, үҙ яҙмышы бар. Әгәр ҙә кеше үҙ яҙмышына үҙе тәьҫир итә алыу мөмкинлегенә эйә булһа, телдәр яҡлауға һәм һаҡлауға мохтаж. Һәм был яҡлау, тәү сиратта, телде йөрөткән милләт вәкилдәренең иңенә төшкән бурыс, сөнки үҙ телен хөрмәт итмәгән кеше башҡаларҙан да үҙ теленә хөрмәт талап итә алмай". Артабан һүҙ ҡуйыртыуҙың кәрәге юҡтыр, моғайын.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*✓ Торатау рухи ныҡлығыбыҙға үҙе имтихан ала беҙҙән бөгөн. Инде изгеләрҙән-изге тауыбыҙҙы бирһәк, артабан беҙҙең "башҡорт" тип күкрәк ҡағырға, милләт булып ҡалырға хоҡуғыбыҙ булыр микән?*



гән әҙәм кисләтеп кенә килеп, беҙҙең өйҙә туҡтап киткәйне. Олатайығыҙ уны бал балы менән һыйланы. Төнө буйы һөйләшеп ултырып, таң атыр-атмаҫ юлға сыҡты", -тип һөйләүенән белдек. Күрәһең, был хәл бөйөк шәхестең Башҡортостаны менән мәңгегә хушлашҡан осоронда булғандыр һәм тыуған төйәгендә һуңғы төнөн беҙҙең Батыр ауылында (Федоровка районы) үткәргәндер.

Ҡыҙҙар тауына һуңғы тапҡыр күтәрелгәндән һуң ярты йыл үткәс, олатайым, ҡышҡы зәһәр селләлә юлға сығып, үпкәһенә һалҡын тейҙереп, гүр эйәһе булып ҡуйҙы һәм, әйтеүемсә, ысын хазинаға тиң боронғо китаптары ла уның менән бергә ер ҡуйынына инеп ятты. Бына хәҙер килеп шул тау башында уҡылған китапты табып, эсенә инеп сумһаң ине, ундағы бар мәғлүмәттәрҙе тулыһынса мейеңә һеңдерһәң ине, тип уйлап та ҡуяһың. Ҡоро бушҡа унда Торатау телгә алынмағандыр, уның булмышын, яҙмышын киләсәк менән бәйләп, юҡҡа ғына төрлө иҫкәртеүҙәр яҙылмағандыр. Юҡһа, ниндәйҙер илдә, ниндәйҙер телдә ташҡа баҫылған китап авторҙарына һинең ниндәйҙер Торатауың ниңә кәрәк?

Бында Ҡөрьән Кәримдә яҙылған күҙаллауҙарҙың раҫ килә барыуын да онотоорға ярамай.

Торатау - ер кендеге, тиҙәр. Уның һәм уға йәнәш баҫҡан тауҙарҙың ерҙе күсәренән тайпылдырмай тороусы үҙенсәлекле меңәрләгән тонналы герҙәр булыуы ла бик мөмкин. Әгәр был герҙәрҙе аҡтарып ташлаһаҡ?..

Хәҙер инде биш ҡат күҙлек кейеп ҡараһаң да беҙҙәге Ҡыҙҙар тауынан Торатауҙың түбәһен күреп булмай. Газ болоттары пәрҙә һымаҡ ҡаплаған уны. Артабан янына уҡ килеп тә изге тауыбыҙҙы күрә алмаһаҡ, нишләрбеҙ? Күңелдәребеҙҙе томалаған ғәмһеҙлек һөрөмө генә ғәйепле буласаҡ быға.

## Ниңә бай булдың һин, Уралым?

Тыуған төйәгебеҙҙең, Уралыбыҙҙың байлығын маҡтап, ниндәй генә йырҙар яҙылмаған да, ниндәй генә легендалар тыумаған. Ысын хазина һандығы шул Урал һәм бына ошо хазинаны Хоҙай беҙгә, башҡорт халҡына, бүләк иткән. Рәхәтләнеп, алтын-көмөшкә ҡойоноп, балға-майға ғына сумып йәшә, башҡорт! Йәшәйбеҙ... Әммә алтын-көмөшкә төрөнөп, бал-май һоғоноп түгел, ҡайһы бер башҡорттоң өҫтөнә кейергә йүнле-башлы ыштаны ла юҡ бөгөн. Юҡ, ялҡаулыҡтан, эшләмәй бот күтәреп ятыуҙан ярлы түгел беҙ. Борон-борондан халҡым Уралды төп төйәге итеп, Иҙелдән (Волга) Ертышына (Иртыш) тиклемге иҡһеҙ-сикһеҙ арауыҡта ең һыҙғанып донъя көткән, дөрөҫөрәге, донъя көтөргә ынтылған. Хоҙай биргән байлыҡ менән илен тағы ла байытып, матур итеп, иркенләп йәшәгән дәүерҙәре лә булғылаған уның һәм бына шул бай булыуыбыҙ, байлығыбыҙ башыбыҙға етте лә инде һәм етәсәк тә.

Кемдәр генә таламаны беҙҙе! Берәүҙәр ҡорал күтәреп килеп баҫһа, икенселәр, юха йыландай, шым ғына инеп ояланы һәм аҙаҡ башҡортто кролик һымаҡ йотто. Бына шул баҫҡынсылар менән туҡтауһыҙ алыш, таланыу һәм тапалыу, милләтемде ҡорота яҙып, илемде ус аяһындай ғына ҡалдырҙы ла инде. Бөгөн инде ҡулдарына ҡорал тотоп түгел, ә закон тотоп, законлы рәүештә талайҙар.

Мәскәүҙә ултырған бер билдәле ханым әйтмешләй: "Башҡортостан Рәсәйҙә иң һимеҙ ҡалъя, олигархтар уны аҙағына тиклем һоғонмайынса туҡтамаясаҡ".

Монголдар илен берәү ҙә барып баҫмай. Һин дә, Урал, бай булмай, шыҡһыҙ дала булһаң, бәлки, беҙ ҙә таланмаҫ та, тапалмаҫ та инек.

Торатауға ҡарап: "Ниңә эзбизде үҙ иттең, ҡоро таштан ғына торһаң, һин, тип хафаланмаҫ инек бөгөн", - тип тә ҡуям мин. Ҡомһоҙҙарҙың күҙе күптән һиңә төшөп, һине сеймал, ҡорбанға салына торған мал итеп күрә. Мал салына тора, яңыһы тыуа, үҫә тора. Ә һин бер салынһаң, мәңгелек бушлыҡ ҡаласаҡ. Бары "итең", миллиардтарға әйләнеп, берәүҙең кеҫәһенә инеп ятасаҡ.

Ҡайһы берәүҙәр: "Торатау өсөн Башҡортостандың ике йыллыҡ бюджетына торошло әллә нисәмә миллиард һум аҡса бирәләр икән, байыйбыҙ!" - тип яр һала. Тот ҡапсығынды киңерәк! Икенсе Баҡы исемен күтәргән Ишембайҙа, ағыулыҡ булмау сәбәпле, яҙын иген сәсә, көҙөн ура алмай этләнәбеҙ. Миллион тонналар менән иҫәпләнгән иген игеп, тауыҡҡа һибергә ем таба алмайбыҙ. Торатау өсөн миллиардтар биргән осраҡта ла уның килгән урынына китеп юғалыры көн кеүек асыҡ.

Яҡын-тирәлә ҡырҡҡа яҡын эзбиз ятҡылығы булһа ла, ни өсөн Торатауға сат йәбешә һуң олигарх? Сөнки ул беҙ түгел, һәр тинен һанап өйрәнгән һәм шуның менән миллиардтарын туплаған да. Торатау беҙҙең өсөн изге тау булһа, уның өсөн бары иң арзан сеймал ятҡылығы ғына һәм уны ҡулға төшөрөү өсөн барыһын да эшләйәсәк.

"Торатауҙы бирмәһәләр, Стәрлелә 10 мең кешене эштән ҡыуасаҡтар, "Сода"ның генеральныйы бына шуға хафалана икән", тигән хәбәр ҙә йөрөй. Кеше хәстәрен күрергә ынтылыусы кеше бөтә башҡорт халҡының йөҙөнә төкөрөргә маташмаҫ, ә, аҙыраҡ сығымын арттырып булһа ла, башҡа ятҡылыҡтарҙы үҙләштерергә тотонор ине. Ана, Мәскәүҙәр былтыр бер аҙна төтөн еҫкәгәйне, һаулыҡтарын нығытыу өсөн 10 мең баланы, ҡартҡороно Ҡара диңгеҙ буйына оҙата һалды. Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалалары экологик йәһәттән иң бысраҡ ҡалалар иҫәбендә, ошо ҡалаларҙа йәшәүселәр, тирә-яҡ ауылдар халҡы ғүмерҙәре буйы газ йотоп йәшәй, бына шуларҙың һаулығын нығытыу хәстәрен күрһен ине генеральный директор.

## Был буласаҡ һуңғы имтихан!

Юрматы ерендә үткән "Салауат йыйыны" үҙенән-үҙе икеләтә байрамға әйләнде лә ҡуйҙы. Уның Торатау итәгендә үтеүе халыҡты иң ҡыуандырғаны булғандыр, моғайын. Төҙөлә башланған "Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексына күҙ ташлап, һәммәһе: "Тимәк, Торатау ҡаласаҡ!", "Торатауға теймәйәсәктәр!" тип шатланып, бер-береһенә өндәште. Милләттәштәрем генә түгел, республикала йәшәүсе башҡа халыҡ вәкилдәре лә ысын күңелдән ҡыуанды быға. Күршелә йәшәгән урыҫ ҡарты ла: "Значит, сохраним Торатау", - тип, ҡулымды ҡыҫҡайны ул көн.

Ысынлап та, йөрәктәрен өйкәгән хәбәр бушҡа сыкты, тип ҡыуанған меңәрләгән кешене күреп: "Халыҡ һине ҡайһылай ихтирам итә, мәңге йәшәйәсәкһең әле, Торатау!" - тип, бик тә ҡыуанғайным.Өҫтөндә ҡабат ҡара болоттар ҡуйыра башлағанын күҙем күрһә лә, күңелем күрергә теләмәй. "Юҡ, булмаҫтыр", - тип үҙ-үҙемде йыуатып маташам.

Бер мин генә түгел, һәммәһе лә ышанырға теләмәйҙер бөгөн быға. Шундай вәхшилеккә, оятһыҙлыҡҡа бармаҫтар, моғайын, тигән уйҙалыр халыҡ. Оҙаҡ уйланып, төп башына ултырып ҡалыуыбыҙ ҙа ихтимал. Шуға ла яҡшылап тороп яҡшылыҡ менән өндәшеп ҡалайыҡ. Торатау рухи ныҡлығыбыҙға үҙе имтихан ала беҙҙән бөгөн. Инде изгеләрҙән-изге тауыбыҙҙы бирһәк, артабан беҙҙең "башҡорт" тип күкрәк ҡағырға, милләт булып ҡалырға хоҡуғыбыҙ булыр микән? Ысын мәғәнәһендә һуңғы имтихан буласаҡ был. Торатауҙы алһалар, башҡаһын һорап та тормаясаҡтар һәм илһеҙ ҙә, телһеҙ ҙә ҡалыуыбыҙ бик мөмкин артабан.

**Мөҙәрис БАГАЕВ,**
**РФ һәм БР Яҙыусылар,**
**Журналистар союзы ағзаһы.**

### БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Күренекле рус этнологы, антрополог, археолог һәм гидролог Сергей Иванович Руденко 1885 йылдың 29 ғинуарында Харьков ҡалаһында тыуған. 1904-1910 йылдарҙа Санкт-Петербург университетын тамамлағас, Италияла, Францияла стажировка үтеп, антропология һәм археология буйынса тикшеренеү ысулдарын өйрәнә. 1906-1907 йылдарҙа Башҡортостан буйлап экспедицияға сыға һәм Рус музейының Этнографик бүлеге өсөн ғәйәт ҙур материал йыя. С.И. Руденко башҡорттарҙың тормошон һәр яҡлап, бик ентекле өйрәнә һәм ғәйәт бай коллекция туплай. 2004-2005 йылдарҙа гәзитебеҙҙә уның "Башҡорттар. Тарихи-этнографик очерктар" тигән хеҙмәтенән өҙөктәр баҫтырғайныҡ инде. Бөгөн ошо китаптан файҙалы мәғлүмәттәрҙе "Башҡорт ҡамусы" рубрикаһына бирә башлайбыҙ.**

Башҡорт ырыуҙары араһында ерҙәр XVII быуатта уҡ бүленеп бөтә. Ниндәйҙер ырыуға ҡараған ерҙәр уның милке булып иҫәпләнә, һуңыраҡ, ырыуҙарҙан аймаҡтар һәм түбәләр айырылғас, ырыу ерҙәре уларға бирелә. Рус дәүләте составына ингәнгә тиклем башҡорт ырыуҙары башында бейҙәр торған. Һуғыш ваҡытында улар күрше ҡәбиләләргә һөжүм башында торған, тыныс ваҡытта инде барлыҡ йорт эсендәге мәсьәләләрҙе хәл иткән. Аймаҡ башында аҡһаҡалдар торған. XVI быуаттан бейҙәрҙе старшиналар (ҡайһы берҙә бейҙәрҙең вариҫтары - кенәздәр) алмаштыра. Бейҙәрҙең тарханлыҡ бирелмәгән, яһаҡ түләүсе башҡорттар менән тигеҙләштерелгән ҡайһы бер вариҫтары старшина йәки "яҡшы кешеләр" тип билдәләнә.

XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттар ике ҡатламға бүленгән - хеҙмәттәгеләр һәм яһаҡ түләүселәр. Хәрби хеҙмәт үтергә бурыслы булыусылар һәм шул арҡылы яһаҡ түләүҙән азат ителеүселәр тархан тип йөрөтөлгән. Ғәмәлдә, тархандар "хеҙмәт итеүсе" ҡатламға ҡарамаған, ә хеҙмәт итеүсе һәм яһаҡ түләүсе ҡатлам араһында торған. Улар "рус кешеләре" менән Башҡортостандың көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлау хеҙмәтендә булып, сик буйында ла ер менән ирекле файҙаланыу хоҡуғына эйә булған. 1745 йылда яһаҡ түләүселәр 8395 йортто тәшкил итһә, 1431 тархан хужалыҡтары теркәлгән. Был ваҡытта инде тархандарҙан ғына торған ауылдар ҙа ойошторолған.

Башҡорт старшиналары, шул иҫәптән тархандарҙың ҡайһы берҙәре, халыҡ араһында ҙур абруйға эйә булған. Улар съездарға йыйылып, тышҡы сәйәсәткә ҡағылышлы ҡарарҙар ҡабул иткән, яһаҡ йыйыу өсөн яуап биргән.

Тархандарҙан башҡа барлыҡ башҡорттар, шул иҫәптән старшиналар, яһаҡ түләһәләр ҙә, башҡорттар араһында иҡтисади тигеҙһеҙлек бик асыҡ сағылған һәм улар араһында хакимлыҡ итеүсе байҙар ҡатламы айырылып торған. Ярлылар уларға ялланып эшләгән. Башҡорт йәмғиәте араһында иҡтисади мөнәсәбәттәр Башҡортостандың дүрттән өс өлөшөн алып торған ялан һыҙатында һәм башҡа урындарҙа бер төрлө булмаған. Ялан яғындағы малсылыҡ райондарында ул ярлыларҙың хеҙмәтен файҙаланыу булһа, урман һәм ер эшкәртеү райондарында ул ҙур процентҡа бурысҡа биреү һәм бурыс йөкләмәһе менән бойондороҡлоҡта тотоу нигеҙендә тормошҡа ашырылған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Театр үҙгәрешһеҙ тора алмай, үҙгәреш булмаһа, үсеш тә юҡ, тигән һүҙ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, тормошобоҙҙа ла күпме үҙгәрештәр күҙәтелде. Театр бит тормоштан, тамашасынан тыш йәшәй алмай. Үҙебеҙ ҙә үҙгәрҙек.***

# БАР ҺОРАУҘАРҘЫҢ ДА театр ишегенә йоҙаҡ

**Беҙ кем? Ни өсөн беҙ? Ни өсөн йәшәйбеҙ? Кем өсөн беҙ? Нимә өсөн беҙ? Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ менән Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры баш режиссеры Азат ЙЫҺАНШИН сәнғәт, мәҙәниәт, театр, милләт яҙмышы хаҡында ҡорған әңгәмәһендә ошо һорауҙарға ла яуап эҙләй.**

**▸ Донъяның һәр ҡитғаһында ла ниндәйҙер кризис бара. Ул Америкала башланып, бар донъяны ялмап алған иҡтисади көрсөк булһынмы, мосолман дәүләттәрендәге сыуалыштармы, Европалағы неоколонизация күренешеме, Рәсәй Федерацияһындағы идеологик-сәйәси киҫкенләшеүҙәрме... Ҡыҫҡаһы, оло донъябыҙ ниндәйҙер ҙур ваҡиға алдында торғандай, ҡыран-ғәләмәт килә. Һеҙ бына театрҙың эске тормошон яҡшы белгән кеше булараҡ, донъяла барған иҡтисади, сәйәси, идеологик кризистарҙы нисек** релеп төштө һәм беҙ урамда тороп ҡалдыҡ. Ярай әле, театрҙың гастролгә сығыу мөмкинлеге бар.

**Х. Үтәшев:** Бала саҡта һуғыш тураһында фильмдар ҡарайым да, бындай йән ҡыйышыу кешеләрҙең интеллекты түбән булғанға, үҙ-ара һөйләшеп килешеү мөмкинлеге булмағанға килеп сығалыр, тип уйлай торғайным. Атайым Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан кеше булһа ла, һуғыш тураһында бик һөйләмәй торғайны, әммә мин уның кисерештәренән һуғыштың ҡот осҡос күренеш икәнлеген аңлай инем. Хәҙер инде беҙҙекеләр еңгәс, дошмандар еңелгәс, бөтә кешеләр

менән үҙ-үҙенә бикләнә. Бар донъя, туғандары, яҡындары, милләттәштәре, гөмүмән, кешелек менән арауыҡҡа кәртә ҡуя. Кеше кеше булараҡ ябыла. Ысынбарлыҡ менән мөнәсәбәттән өҙөп, виртуаль донъяға килеп эләгә. Ә был - тупик. Элек режиссура менән шөғөлләнә башлағанда ниндәйҙер яңы идеялар менән яна торғайным, хәҙер күберәк ябайлыҡҡа ынтылам.

**Х. Үтәшев:** Һинең менән килешәм, Азат. Ябайлыҡта - бөйөклөк, ни тиклем ябайыраҡ булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Һуңғы ваҡытта ябайыраҡ, йәғни кешенең тәбиғи асылы һынланыш

**Х. Үтәшев:** Театр үҙгәрешһеҙ тора алмай, үҙгәреш булмаһа, үсеш тә юҡ, тигән һүҙ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, тормошобоҙҙа ла күпме үҙгәрештәр күҙәтелде. Театр бит тормоштан, тамашасынан тыш йәшәй алмай. Үҙебеҙ ҙә үҙгәрҙек.

**А. Йыһаншин:** Үҙебеҙ ҙә үҙгәрҙек, тигәндән. 1993 йылда мин "Туғанлыҡ" фестивалендә Андрей Борисовтың Саха-Яҡут театры ҡуйған "Желанный мой берег" тигән спектаклен ҡарап, тетрәнеп, яныһан тыуғандай булғайным. Дөрөҫөрәге, катарсис кисерҙем.

**▸ Сюжеты нимәнән ғибәрәт һуң уның?**

**Х. Үтәшев:** Сыңғыҙ Айтматовтың әҫәре буйынса ҡуйылған был спектаклдә мине лә тетрәндерҙе. Ваҡиғалар кәмә эсендә бара. Кәмәлә биш кеше ултыра. Уларҙың эсергә һыуҙары, ризыҡтары

**Х. Үтәшев:** Сибай театры халыҡсан, ерлектән айырылмаған, шуныһы менән үҙенсәлекле лә, бәхетле лә. Был театрҙың үҙенә генә хас уйнау манераһы һәм быны ҡабул итеүсе үҙенсәлекле тамашасыһы бар.

**А. Йыһаншин:** Әйтәйек, Сибай театры ҡуйған спектаклдә ҡайын янында мөхәббәт сәхнәһе бара. Тамашасы сәхнәлә барған ваҡиғаларға ҡайғырып, илап йә көлөп ултыра. Ә бит бындай күренеш донъяның бер урынында ла юҡ, һәм был ихласлыҡты һаҡларға кәрәк. Кеше ихласлығының музейы ул был театр.

**Х.Үтәшев:** Тамашасы Сибай театры спектаклендә үҙен күрергә килә һәм үҙен күрә лә. Минеңсә, был бик мөһим фактор. Ул төбәк халҡының үҙенсәлекле менталитетын һаҡлау йәһәтенән дә был бик мөһим.

**А. Йыһаншин:** Шуға күрә лә Сибай театры тураһында ҡырын

**тояһығыҙ? Был хәлдәр театрҙар тормошонда нисек сағылыш таба?**

**А. Йыһаншин:** Эйе, бар кешелек хәҙер ниндәйҙер заман ахырын көтөү тойғоһо менән йәшәгән һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта был үҙгәрештәрҙең барыһы ла кешелектең үҙен ерҙә шул тиклем йәмһеҙ тотоуынан да килә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, кешеләрҙе күпләп ҡырырға тәғәйенләнгән ҡорал етештергән йәмғиәтте нормаль йәмғиәт тип атап буламы икән? Дөрөҫөн әйткәндә, кешелек үҙен юҡ итергә ҡорал етештерә, сөнки ундай ҡорал һуғышында еңеүселәр булмай, ҡаршы тороусы ике яҡ та еңелә һәм күп ҡорбандар бирә. Бында инде минең өсөн йәшәүҙең мәғәнәһе - абсурд. Донъяла шундай күренештәр башланды, тип, ошондай ҡот осҡос, ҡанлы күренештәрҙе күтәргән спектаклдәр ҡуйырға ярамайҙыр театрҙарға, тим, сөнки телевидение, радио, ваҡытлы матбуғат, кино, интернет аша ошондай хәлдәр тураһында мәғлүмәт алып, кеше шул тиклем арыны хәҙер.

Шуға күрә мин Стәрлетамаҡ драма театрында, үҙемсә әйткәндә, ололар өсөн мультфильмдар әҙерләп күрһәтә башланым. Уларҙы һеҙ беләһегеҙ: "Ҡоҙаса", "Аҫылйәр", "Ҡыҙ урлау" кеүек комедиялар. Йәшерәк сағымда, сәхнәлә хәҡиҡәтте әйтергә кәрәк, бының менән тамашасыны тәрбиәләргә кәрәк, тип уйлай торғайным. Бәлки, кәрәктер ҙә, әммә тормошта нимәне эшләргә ярағанын, нимәне ярамағанын халыҡ үҙе былай ҙа аңлай, белә. Тамашасы булараҡ, ундай спектакль ҡараһам, минең үҙемдә лә ауыр тәьҫир ҡала. Йәшәүҙең мәғәнәһен күрмәй башлайым. Театр иң беренсе нәүбәттә кеше күңелендә киләсәккә ҡарата өмөт уятырға тейештер, тип уйлайым.

Эйе, оптималләштереү театрҙарға ла ҡағылды. Бөгөн театрҙар дотацияларының 30 процентын ҡиҫтеләр. Беҙҙең Стәрлетамаҡ театры бинаһының ҡыйығы еме-



алған спектаклдәрҙә тамашасыларҙың йылы ҡабул итеүенә лә шаһитбыҙ.

**А. Йыһаншин:** Ҡаҙандың Ғ. Камал театры барлыҡ театрҙарҙы ла үҙенең сәхнәһенә индереп бармай. Беҙгә был театрға "йәшел урам" асылғас, өс көн һуҙымында баяғы әйткән "мультфильм" спектаклдәрҙе ҡуйҙыҡ. Тамашасылар залға һыйышманы. Элек актер сағымда мин сәхнәлә мелодрамаларҙың, комедияларҙың күпләп ҡуйылыуы менән риза түгел инем. "Ҡаҙан халҡы бынбөтөп килә. Иң тәүҙә араларындағы иң олоһо башҡалар файҙаһына ашауҙан-эсеүҙән баш тарта. Шул рәүешле барыһы ла уның ғәмәлен ҡабатлап, кәмәлә бер бала ғына тороп ҡала. Спектакль аҙағында кәмә ярға килеп етә. Азат, иҫеңдә булһа, беҙ ул спектаклде тағы ла яңынан ҡараныҡ, 2003 йылда, бүрәттәргә барғанда.

һүҙ һөйләй башлаусыларҙы һәр ваҡыт туҡтатам. Халҡыбыҙҙың ихласлығы, эскерһеҙлеге сағылыу йәһәтенән был театрға еткән театр юҡ.

***Бала саҡта һуғыш тураһында фильмдар ҡарайым да, бындай йән ҡыйышыу кешеләрҙең интеллекты түбән булғанға, үҙ-ара һөйләшеп килешеү мөмкинлеге булмағанға килеп сығалыр, тип уйлай торғайным. Атайым Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан кеше булһа ла, һуғыш тураһында бик һөйләмәй торғайны, әммә мин уның кисерештәренән һуғыштың ҡот осҡос күренеш икәнлеген аңлай инем. Хәҙер инде беҙҙекеләр еңгәс, дошмандар еңелгәс, бөтә кешеләр ҙә уҡырға, юғары белемгә ынтылғас, ҡабат һуғыш булмаҫ, тип уйлай инем. Бәхтиһәң, кешенең интеллекты үҫкән һайын, ул, киреһенсә, нисегерәк итеп кешеләргә күберәк юҡ итергә, нисегерәк итеп үҙенә дошман кешеләрҙе юлынан алып ташларға, тигән уй-ниәт менән йәшәй икән. Әгәр ҙә ошондай тенденция күпселек тарафынан хупланып, өҫтөнлөк алһа, донъябыҙ кризистарҙан һис ҡасан да арына алмаясаҡ, тип уйлайым.***

ҙә уҡырға, юғары белемгә ынтылғас, ҡабат һуғыш булмаҫ, тип уйлай инем. Бәхтиһәң, кешенең интеллекты үҫкән һайын, ул, киреһенсә, нисегерәк итеп кешеләргә күберәк юҡ итергә, нисегерәк итеп үҙенә дошман кешеләрҙе юлынан алып ташларға, тигән уй-ниәт менән йәшәй икән. Әгәр ҙә ошондай тенденция күпселек тарафынан хупланып, өҫтөнлөк алһа, донъябыҙ кризистарҙан һис ҡасан да арына алмаясаҡ, тип уйлайым.

**А. Йыһаншин:** Беҙ йыһанға осабыҙ, тип маҡтанабыҙ. Йыһанға ынтылырға яраймы икән һуң беҙгә? Атланттар ни өсөн һәләкәткә осраған? Ярамаған ергә ынтылған өсөн. Беҙ тағы ла юғары технологияларға өлгәшеү менән маҡтанған булабыҙ. Мин үҙем күптәр кеүек интернет менән мауыҡмайым. Ноутбук та һатып алып ҡараным, ятрамайым, күңелем тартмай. Интернетка инеп, виртуаль донъя менән бәйләнешкә ингән кеше аңы

дай спектаклдәрҙең фәҡәт башҡорт театрҙары башҡарыуындағыһын ни өсөн ныҡ ярата икән?" тип оҙаҡ ваҡыт уйланып йөрөнөм. Яуабын да таптым. Башҡорт драма театрҙары актерҙары ихлас уйнай, абруй һәм шөһрәт менән "боҙолмаған". Ҡаҙан тамашасыһы ошондай ихласлыҡҡа һәм эскерһеҙлеккә һыуһаған, күрәһең.

**▸ Һеҙҙең театр йөҙөндә Ҡаҙан тамашасыһы башҡорт халҡының ихласлығын да күрҙе, тип әйтергә лә була инде...**

**А. Йыһаншин:** Тап шулай. Үкенескә күрә, үҙебеҙҙең тамашасы һәм белгестәр быны күрергә һәм танырға теләмәй, һаман булһын театрҙың халыҡты тәрбиәләргә тейешле булыуы хаҡында дидактик талаптар уйлап сығарыла.

**▸ Һуңғы егерме йыл эсендә башҡорт театры үҙгәрҙеме? Үҙгәрһә, нисек, күпмегә үҙгәрҙе?**

**А. Йыһаншин:** Эйе, әммә спектаклде икенсе тапҡыр ҡарағанда мин бер ниндәй ҙә тойғолар кисермәнем. Һәр бер спектаклдең, күренештен, кеше факторы кеүек үк, үҙ ваҡыты булалыр, күрәһең.

**Х. Үтәшев:** Эйе, икенсе тапҡыр ҡарағанда беҙ ул спектаклдән тәүге тапҡыр ҡарағандағы тетрәнеү тойғоһон кисерә алманыҡ шул...

**А. Йыһаншин:** Минеңсә, был беҙҙең үн йыл эсендә ни тиклем үҙгәреүебеҙҙе лә күрһәтәлер...

Ә инде башҡорт театрҙарының үҙгәреүе тураһында һөйләгәндә иһә, мин Сибай театрын миҫал итеп килтерер инем. Тәнҡитселәр был театр хаҡында ирония менән һөйләргә ярата. Ә мин улар хаҡында икенсе төрлө уйлайым. Донъяның башҡа бер театры ла Сибай театры кеүек итеп спектакль ҡуя алмай. Был театрҙа һаман да 60-сы йылдар рухы йәшәй.

**▸ Театрҙы оптималләштереп, мөмкинлектәрен сикләп булһа ла, сәхнәләге кеше образы барыбер ҙә тороп ҡала. Шулай түгелме?**

**А. Йыһаншин:** Минең өсөн иң мөһиме - кеше һәм уның тарихы, уй-хыялдары. Миңә кешенең өндәшмәй тын ҡалыуы оҡшай. Сөнки кеше өндәшмәгән сағында һөйләгәнгә ҡарағанда тәрәнерәк. Өнһөҙлек - ул философия. Хәҙерге театрҙар ниңәлер паузаларҙан ҡасырға тырыша. Сөнки беҙ ни өсөн өндәшмәй торорға кәрәк икәнде аңламайбыҙ.

Мин республикала мөхит театры барлыҡҡа килтереү хыялы менән йәшәйем. Сөнки тамашасыларҙың башҡорт спектаклдәрендә фәлсәфә күргеһе килә. Ә ул юҡ. Бәләкәй формалағы мөхит театры ана шул бушлыҡты тултырыр ине.

Бер йәйҙә Шишмә районындағы Хәсәйенбәк кәшәнәһенә барып ҡарағайным. Шул сакта яҡынтирәләге ауыл йәштәре төндә кәшәнәгә килеп, усаҡ яғып, араҡы эсеп, таштарына исемдәрен яҙып, был изге урынды мәсхәрә итеп киткән булған. Ниндәй хәшәрәтлек һәм ниндәй түбәнселек! Ә бит был кәшәнәгә үҙ заманының, үҙ халҡының бөйөк заты ерләнгән. Ярай, һуңғы ваҡыт был урынды тәртипкә килтереп, ниндәйҙер иҫтәлекле ҡорам төҙөү эштәре башларға торалар. Аллаһы Тәғәлә бар һәм үҙенең барлығын танымағанды юҡҡа сығарыу ҙа уның ҡөҙрәтендә. Ҡаҙғастанға барғанда, мин ундағы рухи донъяның яңырыуына иҫем-аҡылым ҡороп, һоҡланып йөрөнөм. Улар үҙҙәренең изгеләренең хәтерен мәңгеләштерә, ҡәҙерләй беләләр.

✓ *Күп осраҡта мин беҙҙең драматургтарҙың әҫәрҙәрендә ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙә примитивлыҡты күрәм. Ундай әҫәрҙәрҙә идея ла, сюжет та, маҡсат та бар, әммә пьеса үҙе юҡ. Әлбиттә, был бөтә драматургтарға ла ҡағылмай.*

# ЯУАБЫН БЕЛҺӘГЕҘ...

## элергә генә ҡала

**Х. Үтәшев:** Ҡаҙаҡтарға килгәндә, минең күптәнге бер күҙәтеүем бар. Беҙҙә Хөкүмәт, етәкселек йәмәғәтселекте уятырға теләп, нимәлер эшләргә тырыша. Ҡаҙағстанда иһә, киреһенсә, ҡаҙаҡ йәмәғәтселеге бар эштәрҙең башында тора. Улар төрлө-төрлө фондтар барлыҡҡа килтереп, ошо фондтар аша ҡаҙаҡ сәнғәтен һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Ҡыҫҡаһы, улар хөкүмәттән, дәүләттән генә аҡса көтөп ултырмай.

**▸ Башҡорт театры дәүләт ярҙамынан тыш, үҙ иҫәбенә йәшәй аламы? Йәшәһен өсөн ул үҙ эшен нисек ойошторорға тейеш?**

**Х. Үтәшев:** Ниндәй генә театр булмаһын, ул тамашасыларға һатылған билет хаҡы иҫәбенә үҙ-үҙен ҡарай алмай. Бинаны ғына тотоу өсөн дә күпме аҡса кәрәк. Бина ни тиклем ҙур булһа, хеҙмәткәрҙәр ҙә шул тиклем күп кәрәк. Әгәр ҙә айына бер генә спектакль ҡуйып, ҡалған ваҡытта бинаны арендаға бирһәң генә автоном рәүештә йәшәп булалыр. Шул уҡ ваҡытта бинаны арендаға биргән өсөн дә һалым инспекцияһының визаһы, рөхсәте кәрәк. Ҡыҫҡаһы, театр автоном рәүештә йәшәй алмай. Театр үҙ аллы йәшәргә тейеш, тигән һүҙҙәр Мәскәү, Санкт-Петербург яғынан, ундағы шәхси йәки яртылаш шәхси булған, бай-бай инвесторҙары булған театрҙарҙан килә. Хәҙер спектакль ҡуйған өсөн түләүҙәр ҙә ҡыҫылғандан-ҡыҫыла бара. Шул арҡала юрғанға ҡарап аяғыңды һуҙаһың да, ултырғыс тирәһендәге ваҡиғаларға ҡүсәһең инде.

**А. Йыһаншин:** Театрҙарҙы автономияға күсереү уларҙы ябылыуға килтерәсәк. Биналарҙы арендаға биреү ҙә театр сәнғәтен ҡотҡармаясаҡ.

**Х. Үтәшев:** Был осраҡта театр коллективы яңы спектаклдәр, яңы идеялар менән яңыу урынына нисек йәшәргә тигән маҡсат менән эшкә тотонасаҡ. Коммерция - тәүге планға, ижад икенсе планға күскән быҙдай ынтылыштың юғары сәнғәт менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ.

**▸ Капитализмға әҙәбиәт тә, мәҙәниәт тә, сәнғәт тә, театр ҙа кәрәкмәй, сөнки капитализмға милләт тә кәрәкмәй. Дәүләтте милләт үҙенең ихтыяжын үтәү, үҙен һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында барлыҡҡа килтерһә лә, капиталистик мөнәсәбәттәр быны инҡар итә. Әгәр ҙә илебеҙ капиталистик ҡоролош юлында бара икән, киләсәктә милләттең рухи ихтыяждары барыбер ҙә уның буржуазия синыфы ҡарамағына ҡаласаҡ бит. Һеҙ шулай уйламайһығыҙмы?**

**А. Йыһаншин:** Бында ниндәйҙер дөрөҫлөк бар һымаҡ. Әгәр ҙә театр меценат ҡулында булһа, ижадтағы азатлыҡ юҡҡа сығасаҡ. Театр ул сағында заказ буйынса эшләйәсәк. Меценаттың теләгенә ҡаршы режиссер ҙа, актер ҙа бер нәмә лә эшләй алмаясаҡ, улар ҡол, хеҙмәтсе хәлендә ҡаласаҡ.

**Х. Үтәшев:** Кем түләй, шул музыкаға заказ бирә, тиҙәр. Тап шуның кеүек, меценат, продюсер нисек теләй, шулай уйнауға ҡороласаҡ театр. Йәғни бында ла ижад икенсе планға күсәсәк. Әгәр ҙә аҡса алғы планға күсһә, ижад кешеләре бер яҡтан да яҡлаулы булмаясаҡ.

**▸ Хәҙерге башҡорт театрында башҡорт характеры нисек сағыла һәм сағылырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**Х.Үтәшев:** Башҡорт характеры тигәндә, шундуҡ тарихи пландағы героик-эпик спектаклдәр күҙ алдына килә. Ә инде хәҙерге заман геройҙарында миллилек, ҡыҙғаныска күрә, юҡ кимәлендә.

**А. Йыһаншин:** Минеңсә, башҡорт театрына һәр саҡта ла суперромантиклыҡ хас. Был иң беренсе нәүбәттә беҙҙең йырҙарҙа иркен донъяны тойоу булараҡ сағыла. Географик яҡтан ҡарағанда, беҙ быңдай иркенлектән мәхрүм ителгәнбеҙ, ә бына иркенлекте тойоу тойғоһо беҙҙә һаман да бар. Беҙ Азиянан киҫелгәнбеҙ, Европаға ҡарайбыҙ. Юҡ, Европаға ҡарау кәрәк, әммә мәғәнәһеҙ итеп түгел. Мәскәүҙең театр сәнғәтселәре һаман да беҙҙең академтеатрҙың романтизмына һоҡланыу белдерә. Академтеатр - Рәсәйҙең берҙән-бер шундай театры. Башҡа барлыҡ театрҙарҙа ла романтизм жанры юҡҡа сығарылған. Хәҙерге Рәсәй театрҙары сәхнәһендә барған спектаклдәр менән тамашасыны мөхәббәттең барлығына ышандырыу мөмкин булмаған бер саҡта, беҙҙең академтеатр был һәләтен һаман булһа ла һаҡлап килә. Ҡыҙыҡ бит, тулыһынса прагматизм һаҙлығына батҡан Мәскәү, Ҡаҙан тамашасыһы беҙҙең театр актерҙарының эскерһеҙ мөхәббәтенә ышанып сыға театрҙан. Беҙгә был сифатыбыҙҙы юғалтмаҫҡа кәрәк.

**▸ Башҡа телдәрҙән тәржемә ителгән әҫәрҙәрҙе сәхнәләштергәндә йә актер булараҡ роль башҡарғанда үҙегеҙҙең характер менән персонаждың характеры бер-береһен нисек аңлай?**

**А. Йыһаншин:** Урыҫ драматургияһы бик көслө драматургия, әммә мин уларға тотонғанда ниндәйҙер ауырлыҡ кисерәм. Ни өсөн тигәндә, әҫәрҙең ваҡиғалар, конфликт үҫеше, сиселеше барыбер мин уйлағанса, мин аңлағанса түгел һымаҡ. Мәҫәлән, ундай әҫәрҙә бер ваҡиға төп ваҡиға булып тора, ә беҙҙең өсөн ул ваҡиға түгел, факт ҡына. Шуға күрә мин яңыраҡ Островскийҙың Башҡорт дәүләт академтеатрында ҡуйылған "Бирнәһеҙ ҡыҙ"ын бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡараным. Рус дәүләт академия драма театрында Мостай Кәримдең "Айгөл иле" менән Ғәзим Шафиҡовтың "Ҡара юрға"һын да тап шулай икенсе күҙлектән ҡарағайным. Спектаклдәге күп кенә күренештәр миңә көлкө тойолдо, сөнки башҡорттар бер ваҡытта ла улай итмәй. Шул уҡ ваҡытта урыҫ драматургияһы әҫәрҙәрен беҙ ҡуйғанда ла урыҫтарға көлкөлө тойолған күренештәр булырға мөмкин. Шуның өсөн дә беҙгә, бәлки, барлыҡ милләттәргә лә хас булған сюжетлы сәхнә әҫәрҙәрен эҙләргә кәрәктер. Әгәр ҙә миңә Чеховты ҡуйырға тәҡдим итһәләр, мин уның пьесаларын түгел, дөйөм кешелек ҡиммәттәрен сағылдырған хикәйәләрен һайлар инем. Уларҙа милләтенә ҡарамайынса, кешеләр хаҡында һоҡланғыс күренештәр күп.



*Минеңсә, башҡорт театрына һәр саҡта ла суперромантиклыҡ хас. Был иң беренсе нәүбәттә беҙҙең йырҙарҙа иркен донъяны тойоу булараҡ сағыла. Мәскәүҙең театр сәнғәтселәре һаман да беҙҙең академтеатрҙың романтизмына һоҡланыу белдерә. Академтеатр - Рәсәйҙең берҙән-бер шундай театры. Башҡа барлыҡ театрҙарҙа ла романтизм жанры юҡҡа сығарылған. Хәҙерге Рәсәй театрҙары сәхнәһендә барған спектаклдәр менән тамашасыны мөхәббәттең барлығына ышандырыу мөмкин булмаған бер саҡта, беҙҙең академтеатр был һәләтен һаман булһа ла һаҡлап килә. Ҡыҙыҡ бит, тулыһынса прагматизм һаҙлығына батҡан Мәскәү, Ҡаҙан тамашасыһы беҙҙең театр актерҙарының эскерһеҙ мөхәббәтенә ышанып сыға театрҙан. Беҙгә был сифатыбыҙҙы юғалтмаҫҡа кәрәк.*

**▸ Һеҙҙең иғтибарға япон әҙәбиәтенән бер драматик ситуация. Ағаһы менән ҡустыһы ҡая тауҙар аша һунарҙан ҡайтып килә. Ҡапыл дауыл ҡуба һәм ҡусты тейешле кеше аяғында баҫып тора алмайынса, упҡынға тәгәрәй һәм ҡолап төшөп барғанда ташҡа тотоноп өлгөрә. Ул һуңғы көсөн йыйып, өҫкә күтәрелергә маташа, әммә хәле етмәй һәм ағаһына бәхилләшеү һүҙҙәрен әйтеп, ғаиләһен, балаларын етем ҡалдырмауын үтенә. Ағаһы уға әҙгә генә түҙергә, хәҙер өйгә йүгереп ҡайтып, арҡан алып килеп, тартып сығарасағы хаҡында белдерә. Ҡустыһы хәле тамам бөтөп, һуңғы һүҙҙәрен әйтә башлағас, ағаһы: "Балаларымды етем итмә, тиһең, улар һинең балаларыңдыр шул. Беҙ килен менән әллә ҡасандан осрашып йөрөйбөҙ, балаларың минеке", - тип әйтә лә өйөнә табан йүгерә. Ағаһының һүҙҙәре ҡустыһына шул тиклем ныҡ тәьҫир итә, ул үҙендә ағаһы килгәнсе упҡынға ҡоламаҫлыҡ көс таба. Ағаһы килеп, уны арҡан менән тартып сығарыуы була, ҡустыһы уны упҡынға этеп төшөрә. Ағаһы упҡынға осоп барғанда: "Эх, ҡустым, мин бит һине сәмләндерергә генә уйлағайным", - тип ҡыҫҡыра. Ошо ситуацияны һеҙ сәхнәгә ни рәүешле итеп ҡуйыр инегеҙ?**

**Х. Үтәшев:** Һәр бер ситуацияны, ваҡиғаны сәхнәлә уйнап була. Шуға күрә мин иң тәүҙә был ваҡиғаның жанрын билдәләр инем. Жанр билдәләнһә, ҡалған яғы үҙенән-үҙе килеп сыға. Эш шунда: режиссер был ваҡиғаны трагедия итеп күрәме, әллә драмамы?

**А. Йыһаншин:** Был ваҡиғала фекер төйөнө мәҡәлдәге һымаҡ. Был "Яҡыныңды ярҙан эт" тигән фәлсәфәгә лә оҡшаған. Бер үк ваҡытта мин бында комедияны ла күрәм. Унда ҡайһы бер комедияларҙағы һымаҡ, кемдеңдер арт яғына тибеп, тамашасыны көлдөрөү талап ителмәй. Мин шуға аптырайым: кешене көлдөрөү өсөн арт яҡҡа тибеү сәхнәһен мең тапҡыр күрһәтһәң дә, кеше меңенсе тапҡырында ла көләсәк. Был - бик арзан көлөү. Ысын комедияла ваҡиғалар етди, әммә көлкөлө булырға тейеш. Ә был япон хикәйәһендә мин ысын мәғәнәһендәге комедияны күрәм.

**Х. Үтәшев:** Ситуация бик ҡыҙыҡлы, ғүмер менән хушлашыу сигенә еткән ҡустыһы ағаһының һүҙҙәренән һуң сәмләнә һәм унда маҡсат барлыҡҡа килә.

**А. Йыһаншин:** Унда ағаһынан үс алыу тойғоһо уяна һәм шул тойғо уға көс бирә, йәшәүенең мәғәнәһе барлыҡҡа килә.

**▸ Ни өсөн режиссерҙар үҙебеҙҙең драматургтарҙың әҫәрҙәрен сәхнәгә ҡуйырға ынтылмай, күп осраҡта үҙҙәре ваҡиғалар эҙләргә мәжбүр?**

**А. Йыһаншин:** Минең өсөн был бик ауыр һорау. Мин үҙебеҙҙең драматургтарҙың әҫәрҙәрен күп уҡыйым, әммә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо таба алмайым тиерлек. Пьесалағы кире геройҙы тағы ла насарыраҡ итеп күрһәтергә ярамай, уның кире герой булыуын аҡларға кәрәк, тиҙәр. Шуның кеүек, үҙемдең зауҡыма тап килмәгән сәхнә әҫәрҙәренең аҙ булыуын да аҡларға тырышам. Күп осраҡта мин беҙҙең драматургтарҙың әҫәрҙәрендә ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙә примитивлыҡты күрәм. Ундай әҫәрҙәрҙә идея ла, сюжет та, маҡсат та бар, әммә пьеса үҙе юҡ. Әлбиттә, был бөтә драматургтарға ла ҡағылмай.

**▸ Киләсәккә ниндәй шәп идеяларығыҙ, уй-пландарығыҙ бар?**

**Х. Үтәшев:** Мин - актер, шуға күрә барыһы ла мин эшләгән театрҙың киләсәккә ҡорған пландарына, репертуарына бәйле. Икенсенән, уй-пландарыңды ҡысҡырып алдан әйтергә ярамай, ҡыҙығы ҡалмай, тиҙәр. Әлеге ваҡытта бөйөк бейеүсе Рудольф Нуриев хаҡында спектакль әҙерләйбеҙ, мин унда бейеүсенең атаһын уйнайым.

**А. Йыһаншин:** Шәп идеяны новаторлыҡ тип тә атарға була. Ә һеҙ беләһегеҙме, новаторлыҡ тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ бит ул. Сөнки барыһы ла күптән инде уйлап сығарылған, табылған. XVI быуатта Италия театрҙары барыһын да уйлап тапҡан. Беҙ улар уйлап тапҡанды ҡабатлайбыҙ ғына. Бөгөн новаторлыҡ юҡ, мода ғына бар. Шуға күрә хәҙерге ваҡытта миңә кеше яҙмышы ҡыҙыҡлы. Беҙ кем? Ни өсөн беҙ? Ни өсөн йәшәйбеҙ? Кем өсөн беҙ? Нимә өсөн беҙ? Мине түбә таҡтаһына тас элеп ҡуйып, эсенә һыу һалып, таҫҡа актерҙарҙы ултыртып ҡуйып, ни өсөн тастан һыу түгелмәүен билдәләүҙе маҡсат итеп ҡуйыуға ҡарағанда, кеше яҙмышы, уның проблемаһы ныҒыраҡ борсой. Юғарыла ҡуйылған биш һорауға яуап эҙләй башлаһаң, уларҙың һәр ҡайһыһынан унар һорау килеп сыға, ә уларына яуап эҙләй башлаһаң, иллешәр һорау барлыҡҡа килә. Беҙҙең тормош тап шулай булыуы менән ҡыҙыҡлы ла. Әгәр ҙә ошо һорауҙарға яуаптарҙы белһәгеҙ, утты һүндерегеҙ ҙә, шаршауҙарҙы ябығыҙ, театр ишегенә йоҙаҡ элегеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Театр тулы ҡанлы тормош менән йәшәһен өсөн уның мотлаҡ рәүештә тамашасыһы булырға тейешлеге аксиома. Шулай ҙа ике мәшһүр театр сәнғәте әһеленең ошо әңгәмәһен уҡығандан һуң һеҙҙә театрға барыу теләге барлыҡҡа килгән икән, улар үҙ маҡсатына өлгәште, тип иҫәпләйек.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Минең әле ни тиклем бәхетле икәнемде ошондай шатлыҡты үҙе кисергән кеше генә аңлар ине... Өс тапҡыр ҡастым мин. Өс быуат Киҫәкбикә булып йәшәнем... Мәңгелек донъяға Киҫәкбикә булып китәм...***





# КИҪӘКБИКӘ

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА**

**(Хикәйә)**

Ул аҙымдарын ҡыҙыулатты, ашыға-ҡабалана ауыл осондағы өй ишеген шаҡыны. Яулығын сөм итеп бөркәнеп, күҙҙәрен генә ҡалдырып ҡарап торған Киҫәкбикәне шунда уҡ таный өй хужаһы. "Апаҡайым!" Ир кешенең тауышы ҡалтыранып сыҡты, ай яҡтыһында күҙҙәрендәге йәш ялтырап күренде. Ирҙәр күҙендә йәш күреү сәйер түгел ине был осорҙа. Киҫәкбикә лә таныны: күршеһе Үтләү ине өй хужаһы.

- Эй, Хоҙайым, шөкөр, тере йән күрер көнөм бар икән. Ауыл булмағас, ҡот алынғайны.

Ҡалғандарыбыҙҙы ошонда ҡыуҙылар.

- Нимәнән ҡалғандарҙы?

- Иген баҫыуын да, бесәнлекте лә тотош яндырҙылар бит 1736 йылда, шуға һәләк тигәнсә яман аслыҡ булды. Бик күп ҡырылды халыҡ. Ул ерҙәр әле лә ҡара-көйөп ята, бер нәмә лә үҫмәй. Һеҙҙекеләрҙе Себергә һөрҙеләр, апай. Ҡыҙҙарығыҙҙы ҡоллоҡҡа таратҡандар. Ауылдар тотош тигәндәй шул уҡ яҙмышлы. Ә Биксәтәй иҫән, апай!

Киҫәкбикә сәнкеп-сәнкеп елек майҙарына үтеп, аяҡ һыҙлауын да, нисә көндәр тәгәм ризыҡ ҡапмай, һыу менән генә тамаҡ сылатып килеүен дә онотто, шатлығынан ни әйтергә белмәй, хатта тотлоғоп ҡалды. Шунан:

- Үтләү, туғанҡайым, ҡалай ғына бәхетле иттең мине был хәбәрең менән! - тине лә һыңҡылдап илап ебәрҙе.

- Апай, Биксәтәйҙе алып киләйемме?

- Юҡ, туғанҡайым. Аҙыраҡ хәл алайым. Мине был ҡиәфәттә күреп йәлләмәһен. Иртәгә килер.

- Апай, әйҙә. Ана, киленең сәй ҙә ҡайнатты.

- Балаларың иҫәнме?

Үтләү тәрән итеп көрһөндө, тынының ҡайнарлығы хатта Киҫәкбикәнең сикәһенә бәрелде.

- Аңланым, туғанҡайым... - тине Киҫәкбикә.

- Әле бәләкәсебеҙ бар. Ауылда бер нисә сабый тыуҙы. Тотош ауылға йәмғеһе ике һыйыр. Һөтөн сабыйҙарға ғына тотабыҙ. Биксәтәйҙең дә улы бар. Теремек кенә.

Айҙан ашыу юл аҙабы күреп килгән Киҫәкбикә был һөйөнөслө хәбәрҙән һуң йылмайып йоҡоға талды. Иртәгеһен төндә килде улы. Өс йыл эсендә ҡәҙимге буй еткереп, ир ҡорона ингәйне ул. Тәүҙә аптырап, ышанмайыраҡ торҙо был хәбәргә, шунан әсәһен күргәс, ғәйепле кешеләй башын эйеп кенә янына килде. Хәл алайым тәүҙә, тиһә лә, йәлләмәҫлекме ни? Элекке әсәһенән бер ни ҙә ҡалмағайны. Һәр саҡ көр күңелле, шаян һүҙле, гел генә йылмайып һөйләшкән әсәһенең ҡарашында ҡара көйгән ер һыҙланыуы күрҙе Биксәтәй.

- Әсәй, мин һине ҡотҡарам. Әсәй, әйҙә, шул уҡ мин йәшеренгән урынға. Унан һуң күҙ күрер, һин бит минең өсөн...

- Балам, мин һине бурысҡа тип ҡотҡарманым. Әгәр бурыслымын тиһән, улың алдында ғына. Улың булыуына шатландым, йәшәреп киткәндәй булдым. Байрасовтар нәҫеленең дауамы бар, хуп. Килен дә яҡшы нәҫелдән икән. Хуп. Улар быуындан күсә килгән көрәшселәр нәҫеле. Минә күрһәтерһең килен менән ейәнемде. Тик үҙҙәре белмәһен, - тине Киҫәкбикә, тулҡынланыуын йәшерергә тырышып. Улы уның ҡиәфәтенә ҡарап, тәрән көрһөндө:

- Беҙҙе, көл-күмергә өйләндереп, еңдек, тип уйлайҙармы икән? Һарыуҙы ғына ҡайнаттылар...

Киҫәкбикәнең үткер күҙҙәре кинйәһенең тап атаһыныҡы кеүек бөркөт ҡарашында ҡапыл ялтлап киткән нәфрәт осҡоно абайлап ҡалды ла тынысландырыу ниәтенән:

- Улым, ғаиләң өсөн ҡалҡан бул, балаларыңды ишәйт, - тине һәм арҡаһынан тупылдатып һөйөп ҡуйҙы.

- Һине генә йәшерерлек әмәл табырбыҙ, әсәй. Мин хәҙер үк урын әҙерләргә китәм.

- Улай булмай, балам. Мине эҙәрлекләп сыҡҡандарҙыр инде. Тапһалар ҙа, тапмаһалар ҙа, тотош ауылды көл-күмер итерҙәр. Һыныҡҡа һылтау ғына кәрәген аңлайһың бит. Ә мин нисек йәшәгәнмен - шулай йәшәрмен. Иң мөһиме - һеҙ иҫән. Донъя хәлен белеп булмай, бәлки, ҡайтарып та ебәрерҙәр, - тине Киҫәкбикә, ҡараштарын осраштырмаҫҡа тырышып.

Үтләүҙәрҙә, кеше күҙенә салынмай ғына, биш көн йәшәне Киҫәкбикә. Улы Биксәтәйҙең иҫәнлеген белгәс, күрешкә әйләнә башлаған күҙҙәре асылып киткәндәй булды. Биксәтәй балаһын күтәреп, ҡатынын эйәртеп, бер нисә мәртәбә ауылдың түбәнге осона барып, аҡрын ғына атлап кире ҡайтты. Ни эшләп улайтып ауыл урамы буйлап йөрөгәндәрен хатта ҡатыны ла белмәне. Ә Киҫәкбикә, тәҙрә аша ҡарап, күңеле менән балаларын наҙлап-иркәләп ҡалды. Ана бит кинйәһе - Биксәтәйе тас атаһы! Улын күтәреп, ҡайһылай ғорур атлай! Ай атас, рәхмәт яуғыры! Килене лә иш килгән, иҧле генә тойолһа ла башын юғары тотоп атлай... Инә ҡорт ниндәй - күсе шулай. Шулай булһын, иншалла, Байрасовтар ваҡ булманы бер ваҡытта ла. Үҙҙәренең кем икәнлеген, ни эшләгәндәрен белеп йәшәне! Артабан да шулай булһын, амин. Хәҙер фани донъяла уға бер ни ҙә ҡурҡыныс түгел. Тик үҙен һыйындырған, тубыҡ бөкләп, урындыҡҡа ултырып, самауыр шажлатып, сабыйынан арттырып һөт тамыҙып сәй эскәргән, ҡорот иҙеп ашатып, ирәмәл төнәтмәһе менән дауалаған, улы менән күрештергән Үтләү ғаиләһен дә, улын да, ауылды ла хәүеф аҫтына ҡуйырға ярамай. Башҡалар һиҙмәҫ элек китергә кәрәк. Шулай тип уйланы Киҫәкбикә. Шунан ауылынан бик алыҫҡа, Уралтау арьяғына, батшаның ышаныслыһы старшина Мәндарға китте.

* * *

Мәндарға ул барыһын да бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе лә, "Мине һин Екатеринбургҡа кире оҙат, яны ғына ҡулға алдым, тип яҙ, пропуск бир, башҡаларын өндәшмә, һиңә берҙән-бер үтенесем шул", тине. Мәндар уны үҙҙәрендә йоҡларға ҡалдырырға булды. Уның был тәҡдиме шик тыуҙырһа ла Киҫәкбикә ризалашты. Уға хәҙер барыбер ине. Мәндар ҡатынынан Киҫәкбикә тураһында ентекләберәк һорашты. Ҡатыны уға шул хәбәрҙе еткерҙе: "Үҙемде ниндәй яза көткәнен беләм. Тик аяҡтарым ныҡ боҙолған. Майҙанға сығарғанда сатанлап-ыңһанлап атлағы килмәй. Ҡаҙ һуйһағыҙ, йәрәхәттәрен дауалап алыр инем, тине". Ҡатынынан был хәбәрҙе ишеткәс, Мәндар йоҡларға ятҡан урынынан һикереп килеп ултырҙы. Ынтылып еләнен алды, ҡатаһын ҡуналтаҡ көйө кейеп алды. Ҡатыны иренең шул тиклем ныҡ ярһығанын күптән күргәне юҡ ине. Киҫәкбикәнең үҙ ауылында булыуын, улы менән күрешеүен юҡҡа әйттем ахыры, тип ҡурҡып китте.

- Йоҡламаһа, саҡыр әле Киҫәкбикә апайҙы, - тине Мәндар, алғы бүлмәгә сығып.

Киҫәкбикә бешекләнгән йөнтәҫ япраҡтың һутын һығып табанын ыуа ине, шунда уҡ таҫтарын бөркәнде лә Мәндар янына инде.

- Киҫәкбикә апай, һине ниндәй яза көткәнлеген мин дә беләм. Һин миңә туған... Апай, ҡал беҙҙә. Аяҡтарың уңалғанса йәшә. Тик урамға сығып, кеше күҙенә салынып йөрөмә, бер кем дә белмәһен. Шунан пропуск яҙып бирермен. Беҙҙә ваҡытта нимә танһыҡлаһаң, шуны аша. Ни һағынһаң, шуны эшлә. Төндәрен ихатала йөрө, тик һаҡ бул. Юғиһә, нимә янағанын үҙең беләһең - минең дә балаларым ишле, - тине.

- Рәхмәт, Мәндар. Изгелегең балаларыңа ырыҫ булып ҡайтһын.

Ай ярым йәшәтте уны Мәндар. Киҫәкбикә унын ғаиләһендә ҡорот ҡайнатышты, ҡыҙыл эремсек киптерҙе, балан ҡағы ҡойҙо, ҡаҙы яһашты, тултырма тултырҙы, мәтрүш, шалфый ҡушып бәйләнгән ҡайын япрағы менән мунса инде, шау сәскә итеп сигеүле алъяпҡыстар һалып, таҫтар бөркәнеп йөрөнө, Мәндарҙың, улының, Үтләүҙең ғаиләһенә, ауылдаштарына, юлда саҡта үҙенә ярҙам ҡулы һуҙғандарға именлек-бәхет теләп доға ҡылды, аят уҡыны. Аяҡ яралары уңалғас, Мәндарҙан пропуск алды ла Дыуан юлынан да Ирәләш йылғаһы буйындағы туғаны Рәсге Байрасовта ике көн йәшәп, батшаның ышаныслыһы Мәхмүт Мамаҙилин тигән кешегә китте. Мәндар биргән пропускаһын йыртып ырғытты. Хәҙер инде пропуск кәрәкмәй ине. Мамаҙилин ул күрешкән кешеләрҙе белергә тейеш түгел. "Айыуҙың ни эс яғына ла индермәй тынланы ла, бер йотом һыу ҙа эсермәй, шунда уҡ кабат Екатеринбургҡа алып китте...

* * *

- Һин Туйгилдене ни өсөн яндырғандарын белһәң дә үҙегеҙсә доға ҡылырға йөрьәт итәһеңме? Үтә өлкән дә түгелһең бит, апай, йәшәгең килмәйме ни?"

- Катерина булыпмы!? - Киҫәкбикә асыу тулы күҙҙәрен Иван Дураковҡа төбәне. Был ҡараштан хатта бығау ҡулсалары шартлап өҙөлөп, тимер киҫәктәр селпәрәмә таралыр кеүек ине. Ярһыуынан ни эшләргә белмәгән Киҫәкбикә тороп баҫты, әммә бығау ауырлығынан ҡаҡ һикегә ҡабат ултырҙы. Тимер сынйыр ҡулсалары сыңлап китте. Төрмә бүлмәһендә тынлыҡ урынлашты. Иван Дураковтың тағы ни ҙә булһа өндәшергә түгел, уның ягына ҡарарға ла баҙнаты етмәне. Бер аҙҙан ул һаҡлыҡ менән генә башын борҙо. Киҫәкбикә тәҙрә ярығынан тубығына һыҙылып ҡына төшкән нурҙы һыйпап ултыра ине. Биксәтәйенең ҡулындағы ейәнен күҙ алдына килтереп, шул нурға оҡшатып, уй-хыялы менән иркәләп йылмайҙы. Күңеле сабый һөйөү наҙына тулған йылмайыуҙан ҡараңғы бүлмә ҡапыл балҡып, яҡтырып киткәндәй тойолдо. Был ауырыу йәки аҡылдан яҙған кеше йылмайыуы түгел, был сәләмәт-һау кешенең ҡәнәғәт йылмайыуы ине. Әйтерһең, әле Киҫәкбикәнең бығауҙарын ысҡындырғандар ҙа, үҙ иркенә ебәргәндәр. Ә ул бейек тау башына артылып, күләс ҡояшҡа бағып: "Ҡояш, мин дә һинең һымаҡ азатмын. Минең йәнемдә бер кем дә, бер ни ҙә тоткон итә алмаясаҡ!" - тип йылмая. Ә ҡояш, уның ошо бәхетен аңлай һәм көлтәләй нурҙарын тик уның ҡыуаныуын уртаҡлашыу өсөн генә һибә.

- Мин йәшәнем! Иңһәлегемдә инемә һалып, аяҡтарыма сарыҡ кейеп, Киҫәкбикә булып атланым; турғайҙар сирҡылдауын Киҫәкбикә булып тыңланым; тыуған яғымдың һауаһын Киҫәкбикә булып һуланым. Минең әле ни тиклем бәхетле икәнемде ошондай шатлыҡты үҙе кисергән кеше генә аңлар ине... Өс тапҡыр ҡастым мин. Өс быуат Киҫәкбикә булып йәшәнем... Мәңгелек донъяға Киҫәкбикә булып китәм...

Был һүҙҙәрҙән һуң Иван Дураков, ҡапыл иҫенә килеп, һөйләшеүҙе теркәй барған ҡағыҙҙарын тотто ла Канцелярияға йүгерҙе. Ул йүгерҙе, артынан Киҫәкбикәнең тантаналы йылмайыуы ҡыуа килгән һымаҡ тойолдо. Бер аҙ баргас, нимәләр онотҡандай, туҡтап ҡалды, шунан кире боролоп барып, ишектәге аҙыҡ бирә торған уйымдан бүлмә эсенә ҡараны. Төрмә тәҙрәһе ярығынан төшкән нур шәлкеме Киҫәкбикәнең иңенә лә, йөҙөнә лә ҡунғайны. Ул ишеккә арты менән торһа ла, тотош булмышынан шул нурҙарға бағып йылмайғаны тойола ине.

**(Аҙағы).**

*(Хикәйә булған хәл нигеҙендә, архив материалдарына таянып яҙылды. Исем-шәрифтәр ҙә, топонимик атамалар ҙа үҙгәртелмәне).*

ЗАУЫҠ

# АЛТЫН ҠОЯШ, ҠЫЙҒЫР БӨРКӨТ...

* * *

- Йәйен үткән, һоро көҙөн еткән,
Ҡышын күп көттөрмәҫ...
Аҡ ҡар ятыр.
- Йәйем йөҙ төҫ менән бер биҙәлһә,
Көҙөм иһә әле мең-мең балҡыр!
Ә унан һуң ятһа ҡары ятыр...
(Ҡар аҫтында иһә ужым ҡалҡыр...)

## Имән

*Р-ға*

Имән - имән инде.
Ҡеүәт булғас,
Үҙе батша бөтә урманға.
Хатта ҡарағайҙар үрә ҡатҡан,
Ишек янлап, һаҡта тормаға.

... Йәмғиәттә лә, тим, булһын икән
Бәхәс тыуҙырмаҫлыҡ имәндәр:
Имән итеп үҙен бер танытҡас,
Имән булып ҡала белгәндәр!

* * *

Һөйкөмләһәң...
Бер ҡарауың
Таштарыңды иретер.
Батшаларҙы мәжнүн итер,
Мәжнүндәрҙе ир итер...

## Нөгөш буйҙарына төштөм әле

Нөгөш буйҙарына төштөм әле -
Йөрәгемде ниҙер өткәнгә.
Ғәмһеҙ баласаҡтын яҡты эҙен
Тапмаммы тип, өмөт иткәнгә.

Болоҡһоуҙар, гүйә, тоноҡ һыуҙар.
Зарлы аҡсарлаҡтар сыйҡылдай.
Нөгөш яраланған ярын ялай,-
Тулҡындары ташта һулҡылдай.

Аҡсарлаҡтар! Нимә янай һеҙгә?!
Тауышығыҙ телә бәгерҙе.
Әллә шулай еткерәһегеҙме
Тирә-йүнгә килгән йәберҙе?

Хәтфә генә сирәм Нөгөш ярын
Баҫып алған әрһеҙ сәнскелек.
Ҡайҙа таллыҡ, ялбыр өйәңкелек,
Йән иркәләр күркәм йәшеллек?!

Тынысланырмын тип,
ҡайтҡайным да -
Үҙең мохтаж икән ярҙамға.
Боҙ аҡтарған, Нөгөш, ҡуйыныңды -
Инем ҡуйыймсы ярҙарға.

Инем ҡуйыймсы ярҙарға...

## Бөркөтләк

*(Вариациялар)*

I

Бөркөт йомолдо түбәнгә-
Йәшенле уҡтыр.
Күк сикһеҙ гәйрәтен биргән -
Тыйыр көс юҡтыр.

Ҡанатлы ла итә ул Күк,
Йәшен дә итә.
Икеһен дә бергә ҡушҡан
Йәнгә ни етә?!.

Йәнен ни өтә?!.

II

Бөркөт атыла түбәнгә-
Йән ҡыйыр бер уҡ!
Күк керешен ысҡындырған -
Тотор әмәл юҡ!

Бейеклек уға кәрәккән
Ҡан ҡойор өсөн.
Ерҙән алған көсө менән
Ҡандырыр үсен.

III

Ҡаянан этенеп бөркөт
Күк йөҙөн инләй.
Ғорур...
Үҙен был тирәлә
Батшаға тиңләй.

Кәрәк икән, йәшен булып,
Ергә атыла.
Ҡая...
Зәңгәр Күк...
Ҡанаттар -
Ашау хаҡына?

Йәшәү хаҡына?!.

IV

Алтын ҡояш, ҡыйғыр бөркөт -
Батша ла Һанат...
Ҡуптарылды Күктән Һанат -
Һыҙғыра ҡанат.

Ер әйләнә, түңкәрелә -
Шыҡыя ғына.
Бейеклек артта.
Көткәне,
Сыҡ! Ҡаршыһына.

... Йөн туҙған, күҙҙе ҡан баҫҡан -
Түгел ҡарарлыҡ.
Бөйөклөктән - түбәнлекккә
Мәлдәй арауыҡ,

Мәлдәй арауыҡ...

## Сер генә

Ҡараштарың сер генә, -
Бер йылмайып көл генә.
Серҙәреңде белгем килә, -
Сер сисергә кил генә.

Ҡараштарың сер генә, -
Йылмайыуға төрөнә.
Яуап итеп күҙ төшөрҙөм, -
Сергә серҙәр берегә.

Ҡараштарың сер генә, -
Сиселерҙәй күренә.
Күҙҙәр серҙе сискән мәлдә
Ин һин йөрәк түремә.

Ҡараштарың сер генә, -
Сергә серҙәр үрелә.
Сергә серҙәр үрелгәндә
Икәү булыр бер генә.

## Кил

Кил һин бөгөн
Күҙле шишмә
Сылтырап аҡҡан ергә.
Ай өләшкән тәңкәләрҙе
Йыйырбыҙ бергә-бергә.

Кил һин бөгөн теге йондоҙ
Күктә ҡабыныу менән.
Ҡыҙыл шәфәҡ, йола үтәп,
Ишеген ябыу менән.

Кил һин бөгөн киске әңер
Ҡанатын елпеү менән.
Кил, юҡһа янып бөтөрмөн
Таң еле тейеү менән.

Кил һин бөгөн күңелдәрҙең
Сайпылып торған мәле.
Бындай мәлде Күккә яҙа
Мәңгелектең ҡәләме.

Кил!..

*Фәнил КҮЗБӘКОВ*



**Юбилярға өс һорау:**

**Һеҙҙең төпкә егелгән атығыҙ ҡайһыһы: фәнме, шиғриәтме әллә уҡытыусылыҡмы?**

- Юртаҡтарымдың ҡайһыһы ла ғәзиз, ҡайһыһы ла яҡын. Тормош юлымда нимәгәлер ирешкәнмен икән - бары уларҙың күндәмлегенә, үҙ-ара яраша алыуҙарына, береһенең көслө, икенсеһенең ҡанатлы, өсөнсөһөнөң сабыр ҙа, түҙемле лә булыуына бәйлелер. Әммә, ни генә тимә, кинйә уландай иң ҡәҙерлеһе, ауырлыҡты күберәк күтәрешкәне, еңел-елпене тейешенсә үткәрешкәне барыбер ҙә шиғриәттер. Ә төптәнерәк уйлаһаң, шиғриәтте шиғыр яҙыу тип кенә ҡарамаһаң, фәндә лә, уҡытыусы хеҙмәтендә лә шиғриәт менән уртаҡлыҡтар байтаҡ ул. Шиғриәт тормошомдоң, булмышымдың һәммә яғына ла, һулар һауалай, уртлаған һыуҙай үтеп инә, тимәксемен.

**"Эх, шул саҡта шулай итмәгәнмен, әгәр ҙә шулай иткән булһаммы..." тигән саҡтарығыҙ бармы? Булһа, улар ниндәй сәбәпкә бәйле?**

- Ҙур үкенестәрем юҡ. Ваҡтарына иғтибар итмәҫкә, төҙәтә алмаҫтайҙы ҡат-ҡат иҫләп, йәнде ғазапламаҫҡа, бер эләккән тырмаға ҡабаттан баҫмаҫҡа тырышам.

**Интернетта һеҙҙең хаҡта студенттарығыҙ "яҡшы кеше" әммә "талапсан уҡытыусы" тип яҙа. Был сифаттарға тағы ла ниндәйҙәрен өҫтәй алыр инегеҙ?**

-Ғәҙел, әммә шәфҡәтле.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "ҠУРАЙ" КАНАЛЫБЫҘ...

## йырлата ла, тәрбиәләй ҙә



**Бөгөнгө көндә тормошобоҙҙо телевизор, телетапшырыуҙар, сериалдарһыҙ күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Ярты быуат элек телевидение техник яҡтан да, тапшырыуҙарының эстәлеге, сифаты яғынан да ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Ошо бәләкәй генә "йәшник"те тоҡандырып, йөҙҙән ашыу төр каналдан телгән тапшырыуыңды ҡарарға мөмкин. Был бихисап каналдар араһында башҡорт халҡының ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек милли телевидение ла бар. Быңа инде өс йыл БСТ каналы менән бер ҡатарҙан "Ҡурай" йыр-моң каналы эшләп килә. Уның эше тураһында каналдың директоры Айгөл Уйылдан ҡыҙы ӘХМӘҘИЕВА менән әңгәмәләштек.**

- "Ҡурай" йыр-моң каналы 2009 йылдың октябрь айында "БСТ+" тип асылды һәм тест режимында эшләй башланы. Ошо уҡ йылдың декабрендә кәрәкле документтарҙы ҡулға алғас, каналға "Ҡурай" тигән исем бирелде. Был исемде беҙ "Йәшлек" гәзите аша конкурс иғлан итеп, тулыһынса халыҡ фекеренә таянып һайланыҡ. Бөгөнгө көндә халыҡ һайлаған исемгә тап төшөрмәй, каналдың милли үҙенсәлеген юғалтыуға юл ҡуймай, башҡортса тапшырыуҙар алып барабыҙ. Көслө конкуренция, төрлө сикләүҙәрҙе еңеп, артабан да эшебеҙҙе билдәләнгән йүнәлештә дауам итер өсөн телевизор ҡараусы милләттәштәрҙең ярҙамы бик мөһим. Музыкаль канал халыҡтың мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүҙән тыш, рухи тәрбиә лә бирергә тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Шунлыҡтан тамашасыларыбыҙға зауыҡлы, сифатлы тапшырыуҙар ғына тәҡдим итергә тырышабыҙ. Үҙебеҙҙең матди базаға, эшсе ҡулдарға ҡытлыҡ кисергәнлектән, "Ҡурай" каналы өсөн был мәсьәлә еңел хәл ителә торғандарҙан түгел. Техник ҡорамалдар, махсус студиябыҙ булмағас, БСТ каналының мәҙәниәт, әҙәбиәт, артистар тормошона ҡағылышлы тапшырыуҙарын махсус һайлап алып, эфирға сығарабыҙ.

Эстрада, сәхнә йондоҙҙары тураһындағы тапшырыуҙарҙан тыш, үҙебеҙҙең дубляж студияһында башҡорт теленә тәржемә ителгән фильмдарҙы ла күрһәтәбеҙ. Совет киноһының Алтын фондына ингән "Кавказ тотҡонбикәһе", "Ы" операцияһы", "Сүллектең аҡ ҡояшы" кеүек фильмдар буйынса халыҡтан бик йылы баһалама алдыҡ. Шулай уҡ, эфирға башҡорт йырсыларынан тыш, башҡа төрки телле халыҡтарҙың йондоҙҙарын да сығарабыҙ. Был беҙгә милләттәштәрҙе ҡәрҙәш халыҡтарҙың ижады менән яҡынданыраҡ таныштырырға, үҙебеҙҙең мәҙәниәтте сит ил телевизор ҡараусыларына еткерергә мөмкинлек бирә. 2010 йылда тапшырыуҙарын 19 илдә күрһәтеүсе Төркиәнең Turkish Music Box музыкаль берекмәһе менән килешеү төҙөлдө. Ул килешеү буйынса "Ҡурай" каналы Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан һәм башҡа төрки илдәр йырсыларының клиптарын эфирға ебәрә. Быға яуап итеп, Turkish Music Box Диана Ишниязова, Сәғиҙулла Байегет, Гөлсөм Бикбулатова менән Вилдан Яруллин, "Бүреләр" һәм "Арғымаҡ" төркөмдәренең ижады аша сит илдәрҙе башҡорт мәҙәниәте менән таныштыра. "Ҡурай" менән Төркиә йыр-моң каналдарын сағыштырып, уларҙың бик үҫешкән, техник яҡтан бай, йырсыларының клиптары матур йыһазландырылған булыуын билдәләп үтергә кәрәк. Шулай ҙа башҡорт йырсыларының клиптары эстәлеге, эстетик тәрбиә биреүе менән айырылып тора. Тик беҙ көнбайыш, рус йырсылары кеүек, сюжетлы клип төшөрә белмәйбеҙ әле.

**(Дауамы 15-се биттә).**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ДӨРӨҪ ТУҠЛАНЫУ...

## ас йөрөү тигәнде аңлатмай

■ Йәш ярымдан дүрт йәшкә тиклемге балалар баҡсаһына йөрөүселәр йышыраҡ артыҡ ауырлыҡ менән яфалана, тип яҙа The Journal of Pediatrics баҫмаһы Монреаль университеты белгестәре тарафынан яһалған докладҡа таянып. Тикшеренеүселәр 1600 бала һәм уларҙың ата-әсәләре менән һынауҙар үткәреп ҡараған. Балаларҙың өстән бер өлөшө дөйөм балалар баҡсаларына, тағын бер өлөшө ғаилә балалар баҡсаларына, 11 процент балалар оҙайлы көн төркөмөнә йөрөгән, ҡалғандары өйҙә өләсәйҙәр менән ултырған. Һимеҙ балаларҙың һаны көндәҙге балалар баҡсаларында һәм оҙайлы көн төркөмөндә йөрөүселәр араһында 50 процентҡа күберәк булған. Тулы кәүҙәле балалар тиҫтерҙәренә ҡарағанда яйыраҡ үҫешә. Быны ғалимдар күптән дәлилләгән инде. Мәҫәлән, Төньяҡ Каролина университеты ғалимдары әйтеүенсә, быңдай балаларҙа дөйөм организмдың хәрәкәт әүҙемлеге түбәнәйә. Ғалимдар билдәләүенсә, баланың бәләкәй саҡта тулы кәүҙәле булыуы уның артабанғы ауырлығына ла йоғонто яһауы ихтимал.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, артерия стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан күҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Эйнштейндың даһилыҡ сере уның баш мейеһенә бәйле - АҠШ-тың Флорида университеты эксперттары фаразлауынса, бөйөк ғалимдың баш мейеһенең формаһы бигерәк үҙенсәлекле була. Улар был асышҡа Эйнштейндың быға саҡлы бер ҡайҙа ла баҫылмаған баш мейеһе фотоларын тикшергәндән һуң килә. Стандарт ҙурлыҡта һәм ауырлыҡта булыуына ҡарамаҫтан, Альберт Эйнштейндың мейе бураҙналары ҡатмарлыраҡ булған. Маңлай өлөштәре лә ғәҙәти кешеләрҙекенән айырылып торғанға күрә, ғалимдар ошондай фекергә килгән дә инде.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып, дауалау һәләтенә эйә.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтән ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Баҡтиһән, ҡамыр аштары, май, сөпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тулыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр ҡыҫкенләшә.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Һуңғы йылдарҙа халыҡтың ышаныусанлығынан, берҡатлылығынан файҙаланып, сирҙәрҙе дауалайбыҙ, яҙмыштарҙы күҙаллайбыҙ, тип, күрәҙә һәм сихыр менән шөғөлләнеүсе һәм шул юл менән мал йыйыусы ялғансылар күбәйҙе. Был шөғөл ислам диненә, мосолмандарға ғына түгел, бөтә халыҡҡа ҙур зыян килтерә. Сөнки сихыр һәм күрәҙәлек - Аллаһҡа һәм Уның Бәйғәмбәренә ышанмау, Уларға итәғәт итмәү, тигән һүҙ.**

# КҮРӘҘӘСЕГӘ ЫШАНЫП...

## башыңа бәлә алма



Әлбиттә, исламда төрлө халыҡ дауалары менән дә дауаланыу рөхсәт ителгән. Ләкин мосолман кешеһе тейешле белеме, тәжрибәһе булған, шәриғәт рөхсәт иткән саралар ҡулланған ысын халыҡ табиптарына ғына мөрәжәғәт итергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә ауырыуҙарҙы бар иткән һәм уларға ярашлы дауаларҙы ла яратҡан. Ысын халыҡ табиптары был турала хәбәрҙар, ә мал йыйыу өсөн генә был эшкә тотонған наҙан кешеләр был хаҡта белмәй. Шуны беләйек: Аллаһ Үҙе хәрәм ҡылған ялған дауалар, күрәҙәлек итеү ҡолдарына шифа бирмәй. Шуға күрә беҙ хәләл менән хәрәмде айыра белергә тейешбеҙ.

Динебеҙ буйынса, күрәҙәселәр һүҙенә, улар еткергән мәғлүмәткә ышанырға ярамай. Сөнки улар еншайтандар менән эш итә, был турала хәҙистәрҙә етерлек һәм анығ әйтелгән. Ләкин кемдәрҙер күрәҙәселәрҙе, сихырсыларҙы "Уларға шундай талант бирелгән!" тип маҡтап бөтә алмай. Иң оло гонаһтар, янылышлыҡтар ҡыҙыҡтырғыс һәм мауыҡтырғыс тойола. Әммә былар Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә тарафынан тыйылған.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһис-сәләм әйткән: "Күрәҙәсегә барып, унан ни ҙә булһа һораған кешенең 40 көн доғаһы (намаҙы) ҡабул булмаҫ". Шулай уҡ: "Күрәҙәсе һәм күрәҙәсегә мөрәжәғәт итеүсе - беҙҙең аранан түгел. Күрәҙәсегә барып, уның һүҙҙәренә ышанған кеше Мөхәммәт Бәйғәмбәр (с.ғ.с) өммәтенә индерелгәнгә (ислам диненә) ышанмаусы була", - тигән.

Хәҙерге ваҡытта ниндәй генә гәзит-журналды асып ҡарама, күрәҙәсе, экстрасенс һәм төрлө бағымсы-

*ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# ҠӨРЬӘН АЯТТАРЫ...

## сирҙән һауыҡтыра

**Американың Флорида штаты Панама ҡалаһының "Әкбәр" клиникаһында эшләүсе Әхмәт әл Ҡаҙий исемле мосолман ғалим эске көсөргәнеш кисереү арҡаһында психикаһы ҡаҡшаған кешеләргә, йөрәк өйәнәге һәм башҡа ауырыуҙар менән яфаланыусыларға Ҡөрьән аяттарын көйләп уҡыуҙың шифалы йоғонтоһо буйынса махсус тикшеренеүҙәр үткәргән.**

Тикшеренеүҙәр өсөн ғалим Ҡөрьән һәм ғәрәп теле тураһында бер нәмә лә белмәгән ауырыуҙарҙы һайлап ала. Уларға тәүҙә Ҡөрьәндең ғәрәпсә теҡсын уҡыйҙар ҙа, һуңынан йөкмәткеһе ниҙән ғибәрәт булыуын инглизсә аңлаталар. Ҡөрьән аяттарының ауырыуҙарға тәьҫирен иң камил заманса приборҙар һәм компьютерҙар теркәп бара. Бер йыл буйы үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһен ғалим 1984 йылдың августында Төньяҡ Америка медицина конгресында уҡып ишеттерә. Һөҙөмтә шаҡ ҡатырғыс була. Ҡөрьән аяттарын тыңлаған психик ауырыуҙарҙың 97 проценты һауыға. Аяттарҙы тыңлағанда уларҙың организмында барған үҙгәрештәрҙе махсус приборҙар теркәй. Унда, аяттарҙы тыңлаусы ауырыуҙарҙың йөрәк эшмәкәрлеге, температураһы, хатта тән тиреһенең дә яҡшырыуы теркәлгән. Конгреста тәҡдим ителгән был материалдар медицина ғалимдарында, йәмәғәтселек һәм киң мәғлүмәт сараларында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

Бер аҙҙан Нидерландтарҙа йәшәүсе психолог профессор Ван дер Ховен да Ҡөрьәндең шифалы тәьҫирен раҫлай. Иң ҡыҙығы, Ван дер Ховен үҙе мосолман түгел, ул Ҡөрьән һәм Ислам дине менән фәнни ҡүҙлектән сығып ҡына ҡыҙыҡһына. Ул "Алла" һүҙен ҡабатлауҙың һәм Ҡөрьәнде уҡыуҙың һаулыҡҡа файҙалы булыуын үҙ тәжрибәһенән сығып, йәғни өс йыл буйы ҙур төркөм пациенттарына үткәргән тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәһе менән иҫбатлай. Ул да мосолман булмаған һәм ғәрәп телен белмәгән ауырыуҙарҙы дауалағас, уларға "Алла" һүҙен ғәрәп теле фонетикаһы нормаларына ярашлы дөрөҫ итеп әйтергә өйрәтә. Һөҙөмтәлә нервылар көсөргәнешләгәнен психик ауырыуға дусар булған, ҡайғыхәсрәттән арына алмай, тормоштан төңөлгән һәм башҡа ауырыуҙарға һабышҡан сирлеләр шап-шаҡтай булып һауыға.

"Әл Ватан" һәм "Катари әр-райя" гәзиттәрендә был психологтың: "Ҡөрьәнде даими уҡыған, ғәрәп теленең яңғырашын дөрөҫ әйтергә һәләтле мосолмандар "Алла" һүҙен ҡабатлауҙан ғына ла ҙур дәрәжәлә төрлө нервылар ауырыуҙарынан, психикаһы ҡаҡшауҙан һаҡлана", тигән һүҙҙәрен яҙып сыға. Психологтың раҫлауынса, хатта "Аллаһ" тигән һүҙҙәге һәр хәреф психикаһы ҡаҡшап, аҡылына зәғифлек килгән кешеләрҙе һауыҡтырыуҙа мөһим роль уйнай икән. Мәҫәлән, профессор, "Аллаһ" һүҙендәге яңғырауыҡлы тәүге "Әлиф" өнө һулыш алыуҙы контролдә тота һәм тын юлы эшмәкәрлеген көйләй; ғәрәпсә яңғыраш алған "л" хәрефе иһә һулыш сығыуын еңеләйтә, ә һуңғы "һ" хәрефе йөрәк менән үпкә бәйләнешен яҡшыртып, йөрәк ҡағышын контролдә тота, ти.

Бөйөк шәйехтәрҙең дә, ғәрәп телендәге һәр хәрефтең йәшәйештең юғары нөктәһе менән фани донъя араһында айырым бәйләнеше бар, тиеүе билдәле. "Алла" һүҙен әйткән һайын Бөйөк илаһты иҫкә төшөргәндәй, зиһенең яҡтырыуын тоймайһыңмы ни? Был тойғонан кешенең булмышы бөтөн тереклекте булдырыусы һәм барса тереклек өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе бөйөк Илаһтың, кешегә йән биргәндә уның йәненә, тәненә һәм аҡылына ғәжәйеп нескә булып үрелгән Алла васыяттары ғилемен тыумыштан белеп, улар артынан барырға ынтылырға кәрәклеге хаҡындағы мәғлүмәтен һеңдереп ала.

Дөйөм алғанда, ғәрәп һүҙҙәрендәге теләһә ҡайһы яңғырауыҡлы өндәр билдәле бер йүнәлештә таралып киңерлек тирбәлеүгә һәләтле. Ул оҙайлы ғына яңғырап китеү һәләтенә һәм кешегә бөтөн яҡтан тәьҫир итеү көсөнә эйә булыуы менән ғалимдарҙы таң ҡалдыра.

Мәҫәлән, "әйн" йәки "ғәйн" тигән өндәр рус һәм башҡа бик күп телдәрҙә осрамай. Тимәк, ғәрәпсә дөрөҫ итеп әйтә белгәндә генә был өндәрҙең тәьҫир итеүенә өлгәшергә мөмкин. Шулай уҡ Ҡөрьән аяттарындағы һәм зикр һүҙҙәрендәге яңғырауыҡлы һәм тартынҡы өндәрҙе дөрөҫ итеп әйткәндә, улар үҙҙәрендәге Илаһтың атрибуттары тураһындағы мәғлүмәтте аят уҡыусының бөтөн тәненә таратып ебәрә.

Бәлки, Ҡөрьәндең бөйөклөгөнөң һәм үҙенә ылыҡтырғыс көсөнөң сере лә шундалыр.

Сүрәләрҙе көйләп уҡыу ҙа ҡаҡшаған нервылар системаһын һауыҡтырыуҙа ыңғай йоғонто яһай. Шулай итеп, бөгөн Ҡөрьән ярҙамында йөрәк өйәнәгенән башҡа тағы бик күп ауырыуҙарҙы дауаларға мөмкин булыуы бөтөн донъяла билдәләлек алды.

ларҙың рекламалары менән тулған. Ә халыҡҡа етә ҡала: кемуҙарҙан, юҡ аҡсаларын бар итеп, маҡталған күрәҙәсе-экстрасенстарға ағылалар. Мәҙәк эҙләүме, сараһыҙлыҡтың сигеме, әллә наҙанлыҡмы был?

Сихыр - хәрәм ҡылынған һәм көфөрлөккә илтә торған эштәрҙең береһе. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйткән: "...һәм улар Сөләймән батшалығында шайтандар уҡыған нәмәгә эйәрҙеләр. Сөләймән кафырҙарҙан түгел ине, ә Бабилда Һарут менән Марут тип аталған ике фәрештәгә төшөрөлгән нәмәне һәм сихырҙы кешеләргә өйрәтеп, шайтандар иманһыҙ булды. Әммә был икәү: "Беҙ фетнә-һынау ғына, имanһыҙ була күрмә!"- тип алдан әйтмәйенсә тороп, бер кемде лә өйрәтмәне. Улар шул ике фәрештәнән ирҙе һәм ҡатынды нисек айырырға икәнлеген өйрәнделәр. Әммә улар Аллаһның рөхсәтенән башҡа бының менән берәүгә лә зарар килтермәнеләр. Улар, үҙҙәренә зарар килтереп, файҙа бирмәй торған нәмәгә өйрәнделәр, һәм улар быны һатып алған кешенең киләсәк тормошта өлөшө булмауын беләләр ине. Үҙ йәндәре бәрәбәренә һатып алған нәмәләре насар булды. Әгәр улар быны белһә ине!" ("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 102-се аят).

Аллаһы Тәғәлә Үҙенең Бәйғәмбәре аша ҡолдарына сихыр зәхмәтенән нисек арынырға, дауаланырға өйрәткән. Сихырҙан һаҡланыуҙың иң көслө сараһы - доға һәм Аллаһҡа зекер әйтеү, "Аятел Ҡөрси", "Ихлас," "Фәләҡ" һәм "Нәс" сүрәләрен уҡыу. Хаҡ мосолман булған кеше үҙен ауырыу йә насар итеп тойһа, иң тәүҙә күрәҙәсегә һәм бағымсыға йүгермәҫ, ә Аллаһтан шифа һорап доға ҡылыр, табиптан диагнозын белешеп, Бәйғәмбәребеҙ өйрәткәнсә дауаланырға тырышыр. Мөхәммәт (с.ғ.с) үҙенең өммәтенә күбеһенсә үләндәр, емештәр менән дауаланырға кәңәш иткән һәм дауаның сығанағы итеп Ҡөрьән һәм балды билдәләгән. Аяҡ аҫтында үҫеп ултырған һәр үләндә төрлө ауырыуҙарға шифа бар. Был әллә ҡасан уҡ иҫбат ителгән. Әммә кешеләр дауаланыуҙың еңел ысулын эҙләпме, әллә уҙ-үҙенә ышанмау арҡаһындамы, үҙенең һаулығын, хатта булмышын сихырсы-күрәҙәселәр иркенә тапшыра.

Сихырҙы дауалау өсөн шәриғәт тарафынан рөхсәт ителгән дауалар бар. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләмгә боҙом ҡылынған ваҡытта Аллаһы Тәғәлә уны был яуызлыҡтан ҡотҡарған. Бары тик сихырсы эшләгән боҙомдо табып, уны юҡҡа сығарғандар. Шуның менән Аллаһ Үҙенең Бәйғәмбәренә шифа биргән. Ғәҙәттә, сихырсылар ептән төйөндәр яһап йәки ҡаҙаҡтарҙы бер-береһенә беркетеп, шуға өрәләр һәм һуғалар. Әгәр был әйберҙәрҙе табып юҡ итһән, Аллаһ ихтыяры менән сихыр зәхмәте лә бөтә.

Әгәр ауырыу үҙ аҡылында булһа, ҡайһы ваҡыт уның үҙенән Ҡөрьән уҡытып та дауалайҙар. Ә ҡайһы саҡта кемдер берәүҙең доға уҡып, ауырыуҙың күкрәгенә йәки башҡа ерenә өрөүе генә лә шифа бирә. Был ваҡытта "Фәтиха", "Аятел Ҡөрси", "Әғраф", "Юныс" һәм "Тәһа" сүрәләренең мәғлүм аяттарын, "Кәфирүн" һәм Ҡөрьәндең һуңғы 3 аятын уҡырға кәрәк. "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәләре өсәр тапҡыр уҡыла. Һәм Аллаһҡа дауаланыуға өмөт менән доға ҡылырға кәрәк. Дауалаусы - Аллаһ Үҙе. Ул һәр нәмәгә ҡөҙрәтле. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән:

"Дауаһын барлыҡҡа килтермәйсә, Аллаһы Тәғәлә бер сирҙе лә барлыҡҡа килтермәгән. Белеүселәр - был хаҡта белә, белмәгәндәр - белмәй".

**Мөхәмәтйәр Нәжметдиндең "Сихыр һәм күрәҙәселек" китабын ҡулланып, Айгизә АСҠАРОВА әҙерләне.**

*ХӘҘИСТӘРҘӘН*

➔ ***Минән һуң өммәтемдә буласаҡ өс төрлө хәлдән ҡурҡам: етәксе даирәләрҙең ғәҙелһеҙлек итеүе, йондоҙҙар менән күрәҙәлек итеүгә ышаныу һәм тәҡдирҙе ялғанға сығарыу.***

➔ ***Аллаһы Тәғәлә дүрт төркөм кешегә асыулы: ант итә-итә һатыу итеүсе, тәкәббер фәҡир, аҙғын ҡарт һәм золомлоҡ ҡылыусы имам.***

➔ ***Өммәтем өс нәмәнән һис туҡтала алмаҫ: мәшһүрлектәре менән маҡтаныу, йыназа артынан тауышланып илау һәм тәбиғәт шарттары хаҡында күрәҙәлек итеү.***

➔ ***Һәләкәткә илтәсәк ете төрлө енәйәттән һаҡланығыҙ: Аллаһҡа ширек ҡатнаштырыу, сихыр, хаҡһыҙға кеше үлтереү, риба йәки етемдәрҙең малын ашау, һуғыш яланынан ҡасып китеү, тоғро ир ҡатынына яла яғыу.***

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Серле бөжәк "траж"

**1960 йылда, миңә 10 йәш булғанда, Муллаҡайҙан өс километр алыҫлыҡта ятҡан Ҡолсора ауылына күсендек. Унда изге, эшсән, илтифатлы бер ҡатын йәшәй ине. Әгәр уның менән булған сәйер тарих тураһында белмәһәм, иҫкә алып тормаҫ инем, бәлки.**

Әммә был тарихҡа тиклем тағы бер нәмә әйткем килә. Самиға апайға мин бер ваҡиғанан һуң иғтибар итә башланым. Бер ваҡыт, уның өйө эргәһенән велосипедта китеп барғанымда, ҡапҡа алдында ниндәйҙер сәйер ҡатынды күрҙем. Уның йөҙө ҡыҙыл-көрән таптар менән ҡапланғайны. Таптар ҡабарып тора һәм төрлө ҙурлыҡта ине. Ҡайһы берҙәре дәүмәле буйынса ла, ҙурлығы буйынса ла күрән ноҡот борсағын хәтерләтте. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡа тире аҫтында күрән һыулы шыйыҡлыҡ менән тулы ине. Ҡаушауымдан тиҙлегемде кәметеп, саҡ ҡоламаным. Шул ваҡытта ҡатын, йылмайып, минең менән иҫәнләште. Тауышынан шунда уҡ таныным - был Сәмиға апай. Мин яуап итеп, ауыҙ эсенән нимәләр мөңгөрләнем һәм был урындан тиҙерәк китеү яғын ҡараным. Уйымдағы ҡараштан мәңгә ғәҙәти Сәмиға апайҙың йөҙөн күҙалланым: аҡ, тигеҙ, бер нисә урында тәрән булмаған шаҙра йөҙ. Әммә бер нисә минут элек күргән күренештән уңайһыҙлыҡ кисерҙем.

Алты йыл үткәс, педучилищеның беренсе курсын тамамлап, каникулға ҡайтҡас, мин Сәмиға апайҙан уның йөҙөндәге үҙгәрештәрҙең сәбәбен һорарға ҡыйыулыҡ иттем. Ул баш тартманы. Барлыҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кеүек, ул да тормошҡа зарланырға яратмай ине. Аҙ һүҙле булһа ла, түбәндәгеләрҙе һөйләне.

...Йәй уртаһында Сәмиға апай, йәш ҡатын, eләккә китә. Ҡолсора тирәләй ул йылдарҙа eләк шул тиклем күп була торғайны, бер урындан бер ултырыуҙа бер бәләкәй биҙрә тултырырға мөмкин. Ул eләк йыйыу менән шул тиклем мауыға, хатта сәйер гөжләүгә лә иғтибар итмәй. Ләкин ҡапыл көслө ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрә һәм ҡулбашынан ҙур бөжәктең осоп киткәнен күреп ҡала. Бөжәк ҡара-көрән төҫтә, һыҙатлы, иңкештән ҙурыраҡ була. Уға әлегә тиклем бындай бөжәк менән ҡабат осрашырға тура килмәй. Өйөнә ҡайтҡас, Сәмиға апай ауырып китә. Тән сыҡҡансы тәне ҡыҙыл, ныҡ ҡыҫытыусы күпертке менән ҡаплана. Участка дауаханаһы табиптары ауырыуға бер нисек тә ярҙам итә алмай. Ауылдаштарын уңайһыҙландырмаҫ өсөн Сәмиға апай өс көн өйөнән дә сыҡмай. Ауырыу, нисек ҡапыл барлыҡҡа килһә, шулай уҡ ҡапыл юҡҡа сыға. Бары тик ауырыған ваҡытта йөҙөндә барлыҡҡа килгән бер нисә соҡор урын ғына тороп ҡала. Ауырыу, ҡатын күңелендә үкенеүле осраҡлылыҡ тойғоһо ҡалдырып, тиҙ онотола.

Әммә икенсе йылына тап ошо ваҡытта ауырыу ҡабат урап ҡайта. Сәмиға апайҙың тәне ҡабат ҡыҙыл күпертке менән ҡаплана. Ауырыуҙы дауалауҙың мәғәнәһе булмай. Шулай йылдың-йылы ҡабатлана. Тәнребирҙе ҡарт, йөҙ йәшлек аҡһаҡал, был бөжәктең траж булыу ихтималлығын әйтә. Бик һирәк осраған был серле бөжәк тураһында бик аҙ билдәле. Башҡорттар унан алыҫыраҡ булырға тырыша. "Траж" һүҙенең аңлатмаһын 1993 йылда сыҡҡан башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән дә эҙләп таба алманым.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Камиллыҡҡа һигеҙ аҫҡыс

**Етенсе аҫҡыс: Күңел асығыҙ һәм оҫталыҡ юлында ҡәнәғәтлек алығыҙ.** Әгәр һеҙ бөгөнгә тиклем алған белемегеҙҙе 30 көнлөк программа менән бәйләп, ошо концепцияларға эйәрһәгеҙ, мотлаҡ оҫталыҡҡа һәм ләззәткә эйә булырһығыҙ. Әммә быға тиклем һеҙ бәхеттең һуңғы тәғәйен урын түгеллеген аңланығыҙ. Киреһенсә, бәхет - ул тормош буйлап сәйәхәт итеү. Иң бөйөк хәҡиҡәт, һеҙ уны аңлайһығыҙмы, юҡмы, әммә ул тормоштоң һәр мәленең саф камиллыҡ булыуынан ғибәрәт. Тормошта хаос юҡ һәм унда булған бөтөн нәмәнең сәбәбе бар. Бөгөндән ошо камиллыҡтың һәм тормоштоң барлыҡ мөғжизәләре мәғәнәһен аңлағыҙ, үткәндә булғандар өсөн үкенеп, бер минутығыҙҙы ла әрәм итмәгеҙ.

Үҙегеҙҙе яҡшыртып, аҡыл ҡеүәһен, тән көсөн арттырып, сәләмәтлегегеҙҙе, характерығыҙҙы нығытып, маҡсатығыҙға табан хәрәкәт итеүҙең үҙенән ҡәнәғәтлек алығыҙ. Ҡәнәғәтлек алығыҙ, әммә рух ныҡлығын юғалтмағыҙ. Барлыҡ замандарҙың барлыҡ бөйөк оҫталары был хаҡта белгән һәм ошо принципты тормошта уңыш ҡаҙаныу өсөн файҙаланған.

**Һигеҙенсе аҫҡыс: Белемегеҙ менән уртаҡлашығыҙ һәм башҡаларға хеҙмәт күрһәтегеҙ.** Тарихтағы иң бөйөк аҡыл эйәләренең һәм философтарҙың барлыҡ аҡылын фильтр аша үткәрһәк, тормошоҙоҙоң мәғәнәһен табырға булыр ине. Тормошта барлыҡ нәмәләрҙән өҫтөн маҡсат булып ябай ғына формула тора: беҙ был донъяға биреү өсөн килгәнбеҙ. Тормош маҡсаты булып маҡсат өсөн йәшәү тора, ә ул беҙҙе уратып алыусыларға хеҙмәт күрһәтеүгә ҡайтып ҡала. Был тормошта әйтелере әйтелеп, эшләнәһе эшләнеп бөткәс, күпме аҡса туплауығыҙ ҙа, ниндәй вазифа биләүегеҙ ҙә, эшҡыуар булараҡ ниндәй абруй яулауығыҙ ҙа, ата-әсә һәм тәрбиәсе буларaҡ ниндәй ҡаҙаныштарға өлгәшеүегеҙ ҙә мөһим түгел - йәшәгән ғүмерегеҙ бары тик башҡаларҙың үҫешенә һалған өлөшөгөҙҙән сифаты менән баһаланасаҡ. Оҙайлы тормош уңышына төп аҫҡыс булып башҡаларға хеҙмәт итеү тора, шул саҡта шәхси тормошоғоҙҙоң сифаты ла мөғжизәле рәүештә үҙгәрәсәк. Бер генә көнөгөҙҙө лә изгелек һәм гүзәллеккә ҡағылмай үткәрмәгеҙ.

Көнсығыш аҡылы: "Тап ошо көн менән йәшә һәм һәр мәлгә ҡыуан", - ти. Көнөгөҙҙө һәр береһен ләззәт менән үткәрегеҙ. Ә бит беҙ күп нәмәне аҙаҡҡа ҡалдырабыҙ. Мәҫәлән, ғаиләгеҙ менән ялығыҙҙы тәбиғәттә үткәрәсәкһегеҙ, ләкин яңы вазифа алғас ҡына һ.б. Күрәһегеҙме, беҙ йыш ҡына төп принципҡа хыянат итәбеҙ: уңыш - аҙаҡҡы маҡсат түгел, ә бары тик уға өлгәшеү процесы ғына. Һәр көндә күпмелер ваҡытты үҙегеҙгә, үҙегеҙҙең яңырыуығыҙға (китап уҡыу, ҡояш байығанын күҙәтеү, музыка тыңлау һ.б.) бүлегеҙ. Тап шул камиллыҡ өсөн мөһим. Ул һеҙҙе эшмәкәрлерәк, һөҙөмтәлерәк, ижадирaҡ итер.

Минең өсөн уңыштың иң яҡшы аңлатмаһы түбәндәгесә яңғырай: "Йыш көләү һәм күп яратыу; интеллектуалдар һәм балалар араһында уңыш ҡаҙаныу; ғәҙел тәнҡитселәрҙең иғтибарын йәлеп итеү; матурлыҡты баһалау; үҙеңдә тулыһынса нимәләрҙер бағышлау, үҙеңдән һуң донъяны саҡ ҡына булһа ла яҡшыраҡ, бер сәләмәт балаға булһа ла күберәк, бер баҡса участкаһына булһа ла таҙараҡ итеп ҡалдырыу йәки социаль шарттарҙы яҡшыртыу; туйғансы уйнау һәм туйғансы көләү, туйғансы йырлау; Ерҙә һин булған өсөн генә бер кешегә булһа ла тын алыуы иркенерәк булыуын белеү - бына нимә ул уңышлы булыу" (Ралф Уолдо Эмерсон).

**Робин ШАРМА.**



## 3 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Убойная сила". Сериал (16+)"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Синдром дракона", 5-я и 6-я серии (16+)
23.35 "Вечерний Ургант" (16+)
00.10 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (16+)
01.10 Ночные новости
01.30, 03.05 "Скала" (16+)
03.00 Новости
04.10 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 " Вести-Башкортостан"
